ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 август (урағай)

2022

№32 (1022)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яңыса иҫәпләп...**
уңырбыҙмы, туңырбыҙмы?



5

**Башҡорт малайын...**
һәр ҡайҙа ла танығыҙ



9

**Күңелдәрҙе тетрәндергән...**
тик тыуған ер бит ул



11

**Йөйәккәйем -**
илһам бирер төйәккәйем!



12-13

**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Шулай итеп, гәзит-журналдарға яҙылыуҙың икенсе миҙгеле башланды: 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 718 һум 98 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# ТАҒЫ ЛА БАШҠОРТ АТЫ ТУРАҺЫНДА

**Йылҡысылыҡ, башҡорт аттарын һәм уға бәйле йүнәлештәрҙе үҫтереү буйынса гәзитебеҙҙә әленән-әле яҙып, фекерҙәр менән бүлешеп торҙоҡ. Тамсы тама-тама боҙ тишә, тигәндәй, ниһайәт, былтыр Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тәҡдиме менән республикала июлдең өсөнсө шәмбеһен Башҡорт аты көнө тип билдәләү тураһында Указ ҡабул ителде. Уға ярашлы, был көндө фестиваль итеп үткәреү күҙаллана ине. Ниһайәт, быйыл, 29-30 июлдә, Баймаҡ районының Граф күле буйында беренсе республика фестивале үтте. Сара һуңынан БР Милли музейы генераль директорының фән буйынса урынбаҫары Зәһир ҠОТЛОСУРИН үҙенең уй-фекерҙәре менән бүлеште.**



**Башҡорт ҡанына йылҡысылыҡ, ат төшөнсәләре тыуғандан уҡ һеңгән, тиһәң дә хата булмаҫ, моғайын. Быны борон-борондан телдән-телгә тапшырылып килгән эпостарыбыҙ, легендаларыбыҙ, риүәйәт-әкиәттәребеҙ, хатта рәсми теркәлеп ҡалған тарихыбыҙ ҙа раҫлай. Ошо беренсе фестиваль һеҙҙә ниндәй тәьҫораттар тыуҙырҙы?**

- Ысынлап та, ат ғүмер буйы башҡорттоң яуҙашы, юлдашы булған. Әммә бына ошо мөһим әһәмиәткә эйә тармаҡты комплекслы үҫтереү, уны йәнләндереү йүнәлеше ниңәлер һаман да иғтибарҙан ситтә ҡала килде. Ул бары энтузиастар әүҙемлеге менән генә йәшәне, тиергә лә мөмкин. Уйлап ҡараһаң, башҡорт аты менән күп нәмә бәйләнгән: спорт та, туризм да, кәсепселек тә, медицина ла, фән дә, хатта мәҙәниәт, әҙәбиәт тә.

(Дауамы 8-се биттә).

БАШ ҠАЛАМ

# СӘСКӘ ТҮТӘЛДӘРЕ...

## күберәк кәрәк

**Өфөлә йәшәгәс, ҡалаға ҡағылышлы яңылыҡтарҙы белеп торорға тейешмен, тип иҫәпләйем һәм шуға күрә көн дә иртән ҡала хакимиәте сайтындағы "Хәбәрҙәр" бүлеген ҡарап сығам. Ундағы һәм телевизор-радио мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡалала күләмле генә эштәр башҡарыла. Уның шулай икәненә һәр өфөлө шаһит, көн-төн тимәй төҙөлөш эштәре бара.**

(Дауамы 2-се биттә).



БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺЫУҘЫҢ ДА...

## ялы-ҡойроғо юҡ



**Йәйҙең йән-тәнгә рәхәтлек һәм шифа бирерҙәй кинәнестәренең береһе - һыу, әлбиттә: диңгеҙ булһынмы, йылға-күл йә быуамы, сылтырап аҡҡан саф һыулы шишмәме... Бала-саға ғына түгел, өлкәндәр ҙә йәй буйына рәхәтләнеп һыу инә, ҡырсын йә ҡомда ятып, ҡояшта ҡыҙына, организмын сыныҡтыра, һыу инеү миҙгеленең һәр көнөн файҙаланып ҡалырға тырыша.**

Ләкин күптәр ошо йәйге йәмле көндәрҙең береһе һуңғыһы булыу ихтималлығын онота, йә булмаһа, яр буйҙарында, һыу төбөндә үҙҙәрен һағалап ятҡан хәүеф-хәтәрҙе бар тип тә белмәй. Йыл һайын бер үк фажиғәнең ҡабатланып тороуына ҡарамаҫтан. Йәй башынан алып, 15 июлгә тиклемге статистика буйынса ғына ла Рәсәйҙә бөтәһе 620 кеше батып үлгән, шуларҙың һәр бишенсеһе - балиғ булмаған балалар. Бындай фажиғәләрҙең сәбәбе - рөхсәт ителмәгән һәм таныш булмаған урындарҙа яңғыҙ-ярым һыу инеү булһа, өлкәндәр араһынан эскән килеш һыуға төшөп батыусыларҙың байтаҡ булыуы билдәле.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *Өлкәндәр араһында батып үлеүселәрҙең күбеһе ир-егеттәр. Был, беренсенән, әлеге эскелек касафаты булһа, икенсенән, "көслө" заттың асылда үҙ көсөн самаламайынса ҡыланыуы һәм шәплеген күрһәтергә маташыуы.*



БАШ ҠАЛАМ

# СӘСКӘ ТҮТӘЛДӘРЕ...

## күберәк кәрәк

Мин бигерәк тә "Көнсығыш сығышы" ("Восточный выезд") һәм Зинино ҡасабаһы янындағы тимер юлы үткәүеле аша эшләнеп ятҡан автомобиль юлы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышам. Үҙем Нуғай ҡасабаһында йәшәгән кеше булараҡ, тимер юлы үткәүелендәге тығындар менән яҡындан танышмын. Әйтергә кәрәк, хатта хаҡлы ялда булып, ҡалаға көн дә йөрөмәһәм дә, минең дә үҙәккә үтте был мәсьәлә, шуға күрә автомобиль юлы төҙәлә башлауын был яҡта йәшәгән меңәрләгән кеше менән бер рәттән, ҡыуанып ҡаршыланым. Вәғәҙә иткәндәренсә, киләһе йылдың аҙағына тапшырырҙар, тип ышанам.

Беҙҙең ҡалаға ғына түгел, ә тотош ил өсөн бәләгә әйләнгән берәҙәк эттәр мәсьәләһе бик борсоуға һала мине. Ҡала урамдарында, бигерәк тә ҡаланан ситтәрәк ятҡан ерҙәрҙә әлләә күпме берәҙәк эттәр йөрөй. Ошо мәсьәлә етәкселектең иғтибарынан ситтә ҡалмаһын ине.

Өфөнөң торлаҡ-коммуналь хужалығы тураһында бер кәлимә һүҙ әйткем килә. Уларҙың эшмәкәрлеген беҙ ихатаны таҙалыҡта тотоусы урам һепереүселәр, сәскә ултыртыусылар эше буйынса баһалайбыҙ бит инде. Шөкөр, ихаталар таҙа, урамдар тулып сәскәләр атып ултыра, иртәндән үк ҡаланы таҙаларға кешеләре лә, машиналары ла сыға. Әле бына интернеттан ҡарайым, бер көндә генә Өфөнө 200-ҙән ашыу техника, 600 тирәһе эшсе таҙалай икән. Төнөн дә эш туҡтамай. Иң мөһиме, ҡала халҡы һәм ҡунаҡтар ошо таҙалыҡты юҡҡа сығармаһын ине.

Өфөнөң Орджоникидзе районына ҡараған Интернационал урамында бик матур сәскәле клумба урынлаштырылған. Ундағы сәскәләр башҡорт орнаментын ҡабатлай һәм бик матур күренә. Ошо миҫалды баш ҡаланың башҡа райондары күҙ уңына алып, үҙҙәрендә лә башҡорт орнаментлы клумбалар булдырһа, ниндәй шәп булыр ине!

Баш ҡалала төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелгән. Күп ҡатлы йорттар ҙа төҙөйҙәр, социаль объекттар тураһында ла онотмайҙар. Шундай объекттарҙың береһе - Күп функциялы спорт көрәше үҙәген төҙөү майҙанында ла эштәр гөрләй. Ошондай спорт объекттарын күберәк төҙөү мөһим, сөнки спорт булған ерҙә насар ғәҙәттәргә урын булмай, тимәк, балаларҙың, йәштәрҙең киләсәге хәүеф тыуҙырмаясаҡ.

**Әсхәт ӘЛИБАЕВ.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺЫУҘЫҢ ДА...

## ялы-ҡойроғо юҡ

**(Башы 1-се биттә).**



Үкенескә, бындай күңелһеҙ статистика Башҡортостанды ла урап үтергә йыйынмай. "Башинформ"дың 24 июль хәбәрендә әйтелеүенсә, шул осорҙағы бер аҙна эсендә генә республикала 12 кеше батып үлә. Шуларҙың береһе 16 йәшлек үсмер бейектән Ашҡаҙарға (Стәрлетамаҡ районы) һикереп, йылғаның һай урынына тап килә һәм бәрелеп, һыуҙан сыға алмай. Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса БР дәүләт комитетында билдәләнеүенсә, Стәрлетамаҡ районында бындай фажиғәләрҙең йыш ҡабатланыуы сәбәбе - урында тикшерелгән һәм махсус ҡулайлаштырылған пляждарҙың булмауы.

Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, быйыл йыл башынан июль ахырына тиклемге ваҡыт эсендә республиканың һыу ятҡылыҡтарында 46 кеше батып үлгән, шуларҙың 6-һы - балалар. Бәләкәстәр һәм үсмерҙәр артынан ата-әсәләре йә башҡа өлкәндәрҙең ҡарауы, ҡурсалауы етешмәһә, өлкәндәр араһында әлеге лә шул баяғы эскелек ғәйепле. Һыу буйҙарында йыш осраған "Бында һыу инеү тыйыла" тигән плакаттарҙы ла эшкә һанауҙы юҡ, күрәһең. Әйтерһең, юрый, үсектереү өсөн яҙып ҡуйылған тиерһең уларҙы. Мәҫәлән, Әбйәлил районының Дәүләт ауылы янындағы Сыбаркүл һыуында батып үлгән 38 йәшлек ир менән тап шундай хәл була ла инде. БР Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, "Бында һыу инеү тыйыла" тигән яҙыу-аншлаг булыуға ҡарамаҫтан, уға иғтибар итеүсе булмаған.

**Әйткәндәй, өлкәндәр араһында батып үлеүселәрҙең күбеһе ир-егеттәр. Был, беренсенән, әлеге эскелек касафаты булһа, икенсенән, "көслө" заттың асылда үҙ көсөн самаламайынса ҡыланыуы, үҙһүҙлеге һәм шәплеген күрһәтергә маташыуы.**

12 июлдә булған тағы бер хәл тап ошоно раҫлай ҙа инде. Стәрлетамаҡ районы Оло Ҡуғанаҡ ауылы янындағы карьерҙа һыу ингәнендә 17 йәшлек егет тә шундай уҡ бәхетһеҙлеккә дусар була. Шул көнө уны һыу төбөнән таба алмауҙары, эҙләүҙәрҙең дауам итеүе хаҡында хәбәрҙәр килде...

Шулай итеп, 1 августа Төбәк менән идара итеү үҙәгендә булып үткән кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, былтыр ошо уҡ осорҙа батып үлеүселәр һаны 87 кеше тәшкил иткән. Быйыл иһә фажиғәләр һанының әҙерәк булыуы һыу инеү миҙгеленең һуңыраҡ башланыуына бәйләләр, тип уйларға кәрәк, сөнки йәй баштарында көндәрҙең ярайһы һалҡынса тороуы һыу инеү миҙгелен бер аҙ кисектергәйне лә, ләкин унан һуңғы осорҙағы эсе көндәр бар ғәмде йылға-күл буйҙарына "ҡыуып" төшөрә башланы. Тәбиғи, хәүеф тә, ҡотҡарыусыларға эш тә артты. Баш ҡалабыҙҙың Граждандарҙы һаҡлау идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, июндән башлап 1 августа тиклем ҡотҡарыусылар Өфөлә 52 кешене батыуҙан ҡурсалап, үлемдән ҡотҡарып ҡала, ә бына 6 кеше ҡарауһыҙ һәм махсус ҡулайлаштырылмаған урында һыуға төшөп, батып үлә. Һуңғы осраҡтарҙың береһе - Өфөләге Тәрән күлендә батып һәләк булыусы 64 йәшлек ир. Күңелһеҙ күрһәткестәр былтырғынан әҙерәк булһа ла, тынысланырға урын юҡ һәм бер-ике генә бәхетһеҙлек осрағы менән дә тынысланыу мөмкин түгеллеген һәр кем яҡшы аңлайҙыр. Кемдәндер ғәзиз балаһы, атаһы, ире, яҡындары, дуҫтары бит улар - һаҡһыҙлыҡ һәм битарафлыҡ ҡорбандары...

Алда әле йәй ахырына тиклем тотош бер ай, ҡояшлы һәм эҫе көндәр дауам итә. Белеп булмай, ҡайһы бер йылдарҙа сентябрҙә лә әле көндәр эҫе тороусан. Тимәк, кеше һыу инеүҙән туҡтамаясаҡ. Хәҙер бит һәр кем гаджеттар менән айырылғыһыҙ дуҫ, интернетҡа юл асыҡ. Һирәкләп булһа ла күңелһеҙ статистикаға ла күҙ һалғылап, бәхетһеҙлек осраҡтарынан ғибрәт алынһа икән, юғиһә, кешегә ғәҙәттә бәлә-ҡаза ҡайҙалыр алыҫта йөрөй кеүек тойола, ә ул эргәлә генә, аяҡ аҫтында, бигерәк тә әгәр кеше үҙ хәленә битараф булып, һаҡһыҙ-уйһыҙ ҡыланһа. Халыҡ әйтмешләй, уттың ғына түгел, һыуҙың да ялы-ҡойроғо юҡ - тотонор йәбешеп сығыр әмәл дә юҡ. Үҙегеҙҙе, яҡындарығыҙҙы, балаларҙы һаҡлағыҙ!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠАРАҢҒЫЛЫҠТЫ ТӘНҠИТЛӘГӘНСЕ...



**Һүҙ юҡ, бөгөнгө йәштәр менән ғорурланырға була. Улар әлеге оло быуын кешеләренән бик күп матур сифаттары менән айырыла. Әммә... яуаплылыҡ тигәне самалы инде.**

Нимә ул яуаплылыҡ? Ул минең аңымда кешенең тормоштағы урынын, абруйын, башҡаларҙың ышанысын нығытыусы, хөрмәтле шәхес итеп әүәләүсе ин төп сифат. Хәҙерге йәштәрҙең ҡайһы берҙәре араһында был сифат бик үк һанға һуғылмай һымаҡ күренә. Ундайҙар шул аркала бер сиктән икенсеһенә һуғылырға, үҙемде эҙләйем, тигән һылтау менән эштән-эшкә күсеп йөрөргә, ҡыҙыҡһыныуҙарын алыштырырға, мөнәсәбәттәргә хыянат итергә мөмкиндәр. Ундайҙар хатта яуаплылыҡ тигән сифатты һанға һуҡмау арҡаһында илһөйәрлек, телһөйәрлектең ысын баһаһын да аңламаҫҡа мөмкин...

...Йәш ғаилә ағзалары йыйылған бер ҡорҙа бөгөнгө сәйәси хәлдәр тураһында һөйләшеп киттеләр. Барыһы ла белемле, төрлө вазифалар биләгән йәштәр. Барыһы ла бөгөн бар хәлдәрҙе насар итеп күрһәтергә тырышҡан бер егеттең һүҙен йөпләй, үҙҙәре лә ҡушылып китә. Уларҙың был әңгәмәһен бүлеп, нимәләр иҫбат итергә маташыу урынһыҙ тип уйлап, өндәшмәйем...

Йәш атай-әсәйҙәр эргәләрендә бәләкәй һәм мәктәп йәшендәге балалары урала, улар йә уйын менән мәшғүл, йә өҫтәл артына ултырып, ризыҡтарҙың тегеһен-быныһын барлай. Барыһы ла русса һөйләшә. Әлбиттә, һәр кемдең, шул уҡ йәштәрҙең дә, дөрөҫмө-түгелме, үҙ фекерен әйтергә хоҡуғы бар. Ә бына был хәлгә - балаларын туған телдән мәхрүм итеүгә уларҙың хоҡуғы юҡ. Тап ошо юҫыҡта түҙмәнем, телем сиселде лә китте: "Һеҙ кемде, нимә өсөн тәнҡитләйһегеҙ? Тыуған ерегеҙ өсөн, халҡығыҙ өсөн һеҙ үҙегеҙ нимә эшләнегеҙ? Һеҙ бит үҙегеҙҙең иң төп бурысығыҙҙы- балаларығыҙҙы туған телгә өйрәтеүҙе лә үтәмәгәнһегеҙ. "Караңғылыҡты әрләгәнсе, үҙең бәләкәй булһа ла бер шәм тоҡандыр", тигәнде беләһегеҙме?"

Йөштәрҙең дә, минең үҙемдең дә кәйеф төштө. Кәйефһеҙ таралыштыҡ. Белмәйем, берәйһе ҡолаҡ һалдымы, уйландымы минең тәнҡиткә? Нисек кенә булмаһын, улар хәҙер минең алда әлегесә һөйләшеүҙе башламаясаҡ. Минең менән ҡорҙаш булырға теләһәләр әле...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров июлдә Волга буйы федераль округы губернаторҙары медиарейтингында беренсе урын алды. Икенсе һәм өсөнсө урындарҙа - Татарстан Башлығы Рөстәм Миңнеханов һәм Түбәнге Новгород өлкәһе губернаторы Глеб Никитин. Федераль рейтингта Радий Хәбиров 11-се урынды алды, өс лидер исәбендә - Мәскәү мэры Сергей Собянин, Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев һәм Чечня Башлығы Рамзан Ҡадиров.

✓Башҡортостандың ауыл хужалығы етештереүселәренә страховкалау өсөн сығымдарҙың яртыһына тиклемен ҡаплайҙар, быйыл дәүләт ярҙамының суммаһы - 197,5 миллион һум. 2021 йылда Башҡортостанда агрострахоакалау өсөн субсидияларҙың суммаһы 118,6 миллион һум ине. "Дәүләт ярҙамы менән агрострахоакалау ауыл хужалығы производствоһының килемлелеген тәьмин итеү, тармаҡта оҙайлы планлаштырыу өсөн мөһим", - тип иҫәпләй Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

✓Доставалов исемендәге батальон яугирҙарына Башҡортостандан бетеүҙәр алып килдек, тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. "Бер аҙна элек Шайморатов исемендәге батальонға ла шундай бетеүҙәр ҡалдырғайныҡ. Күңел йылыһы һалынған бетеүҙәрҙе уларҙың хәләл ефеттәре биреп ебәрҙе", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, был тылсымдарҙы Урал арьяғы оҫталары эшләгән.

✓Башҡортостанда "Ата-әсә ҡаһарманлығы" наградаһы тураһында положениеға төҙәтмәләр индерелде. Тейешле указға 8 августа республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. Хәҙер патронат тәрбиәселәр ҙә миҙалға һәм бер тапҡыр бирелә торған 100 мең һум аҡсаға дәғүә итергә мөмкин. Тик ғаилә ете һәм унан күберәк бала алған осраҡта ғына. Бынан тыш, инвалид, етем балаларҙы тәрбиәгә алыусылар ҙа наградаға хоҡуҡлы.

✓Рәсәй Хөкүмәте ауыл ипотекаһы программаһына тағы 7 миллиард һум бүлде. Был транш кредит алғандарға кредит буйынса 3 процент ставканы һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Премьер-министр Михаил Мишустин вице-премьерҙар менән оператив кәңәшмәлә ошо хаҡта белдерҙе. "Бүленгән сумманың яртыһы яңы кредиттарға йүнәлтелә, шул рәүешле тағы 17 меңгә яҡын ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртырға мөмкин. Ҡалғаны элек бирелгән кредиты хеҙмәтләндереү өсөн тотонола", - тине Мишустин.

✓ ***Баланы тапҡас, уны әрләргә ташланмағыҙ. Уның яғынан да, һеҙҙең тарафтан да ебәрелгән хаталарҙы тикшереп сығығыҙ: бала һеҙҙе юғалтҡас, бер урында ҡалғанмы, ҙурыраҡ йәштәгеләргә килешелгән ергә барғанмы.***



*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# АҢҒАРТЫЛҒАН...

## тимәк, ҡоралландырылған

**Күптән түгел ҡалала уҙған ҙур сараларҙың береһендә танышымдың 5 йәшлек малайы юғалды. Халыҡ күп, метр һайын тиерлек ҙур музыка колонкаларынан көслө тауыш ағыла, янында торған кешенең нимә һөйләгәнен ишетерлек түгел. Күҙ асып йомғансы юғалған малайҙы эҙләп, тегеләй йүгерҙек, былай ташландыҡ, бер аҙҙан полиция хеҙмәткәрҙәре ҡушылды. Өс сәғәт тигәндә илап хәле бөткән баланы таптыҡ. Байрам ҡайғыһы китте, өйҙәргә таралыштыҡ. Был хәлдән һуң, бындай ваҡиға ҡабатланмаһын өсөн ниндәй саралар күрергә кәрәк һуң, тигән һорау тыуҙы. Уға яуапты Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре бирҙе.**



● Кеше күп йыйылған урындарға, сараларға барғанда үҙең менән баланың фотоһүрәтен алыу мотлаҡ (күптәрҙең телефонында бындай фотолар була, ғәҙәттә). Шулай уҡ нәҡ кеше араһына инер алдынан баланың ниндәй кейемдә килгәнлеген күрһәткән фотоһүрәтте эшләү ҙә кәрәк. Әгәр ҙә бала юғала ҡалһа, уны эҙләүҙә һәр бер бәләкәй генә деталь дә мөһим, ә уның нәҡ ошо мәлдә ниндәй ҡиәфәттә булыуын күрһәткән фотоһүрәт эҙләү процесын бермә-бер еңеләйтәсәк.

● Төрлө сараларға барғанда балаға сағыу кейем кейҙерегеҙ, был осраҡта ул күп кеше араһында айырылып күренеп торасаҡ. Шулай уҡ уның кесәһенә бәләкәй ҡағыҙ кисәгенә баланың исем-шәрифе, бәйләнеш өсөн телефон номеры һәм ниндәй дарыуҙарға аллергия барлығын күрһәткән мәғлүмәт һалып ҡуйыу ҙа артыҡ булмаҫ. Бер үҙе илап йөрөгән балаға күптәр иғтибар итә, ләкин күп осраҡта бала ҡаушауҙан, ҡурҡыуҙан үҙе белгән мәғлүмәтте лә оноторға һәм ололарға яуап бирә алмаҫҡа мөмкин. Ә кесәһендәге мәғлүмәти ҡағыҙ уның ата-әсәһен табыуҙа ныҡ ярҙам итәсәк.

● Ҙур сараларға сыҡҡанда балаға ҡиммәтле әйберҙәр (кәрәҙле телефон, алтын биҙәүестәр һ.б.) бирмәү хәйерле. Был криминал менән булышҡандарҙан араларға ярҙам итер.

● Кеше күп йыйылған ергә барыр алдынан бала менән тейешле инструктаж үткәрегеҙ - исемен, адресын, ата-әсәһенең исемен ятлатығыҙ. Шулай уҡ, әгәр ҙә бала аңлай алырлыҡ йәштә булһа, юғалған осраҡта ҡайһы ергә килергә кәрәклеген һөйләшегеҙ. Мәҫәлән, ҙур сауҙа үҙәгендә бындай урынды ингән ишек алдында йәки яҙыулы ҙур магазин алдында билдәләргә була. Урамда барған саралар ваҡытында иһә алыҫтан күренеп торған алтаҡталы урынды билдәләргә мөмкин. Шулай уҡ балаға кемгә мөрәжәғәт итергә мөмкин булыуын да иҫкәртергә онотмағыҙ - полиция хеҙмәткәре, тундырма һатыусы, кафе эшсеһе һәм башҡалар.

● Ә килешелгән урынды эҙләп таба алмаҫтай бәләкәй бала иһә мотлаҡ бер ҡағыҙәне - әгәр ҙә юғала ҡалһа, бер урында тик торорға кәрәклеген - ятлап алырға тейеш. Ата-әсәләргә иһә, бала күҙҙән юғалған осраҡта, үҙҙәре килгән маршрут буйынса кире барырға кәрәк. Шулай уҡ үҙаллы эҙләүгә ваҡыт сарыф итмәҫкә, ә тиҙ арала полиция хеҙмәткәренә, сауҙа үҙәге һаҡсыларына мөрәжәғәт итеү мөһим. Күп кеше араһында баланы күреп ҡалған саҡта уны ҡысҡырып саҡырырға тырышмағыҙ, ә күҙ уңынан ысҡындырмайынса, артынан барығыҙ һәм һеҙҙе күрерлек булғас ҡына өндәшегеҙ.

● Баланы тапҡас, уны әрләргә ташланмағыҙ. Бер аҙ тынысланғас, уның яғынан да, һеҙҙең тарафтан да ебәрелгән хаталарҙы тикшереп сығығыҙ: бала һеҙҙе юғалтҡас, бер урында ҡалғанмы, ҙурыраҡ йәштәгеләргә килешелгән ергә барғанмы, һәм башҡалар.

● Балаға мотлаҡ рәүештә ят кешеләргә эйәреп китмәҫкә кәрәклеген, улар менән машинаға ултырырға ярамағанлығын аңлатырға кәрәк. Әгәр ҙә кемдер уны көсләп алып китергә тырышһа, ҡысҡырып, тирә-яҡтағыларҙың иғтибарын йәлеп итергә һәм ярҙам һорарға кәрәклеген ныҡлап төшөндөрөү мотлаҡ.

● Бер кемдең дә урамда йәки башҡа урындарҙа уға тейергә, ҡосаҡларға һәм үбергә ынтылырға, алдына ултыртырға, енси ағзаларына ҡағылырға хаҡы юҡ икәнлеген яҡшылап аңлатығыҙ. Бындай осраҡта йүгереп ҡасырға, яҡындағы магазинға инеп йәки үтеп барыусыларға мөрәжәғәт итеп, ярҙам һорарға кәрәклеген бала үҙләштерергә тейеш. Әгәр ҙә ошондай ҡағиҙәләрҙе яҡшы белһә, ул юғалып ҡалмаясаҡ һәм төрлө күңелһеҙ хәлдәргә тарымаясаҡ. Даими рәүештә ошо ҡағиҙәләрҙе уйын формаһында ҡабатлағыҙ, был баланың хәтерендә яҡшы һаҡланасаҡ.

● Бер үҙе йәки дуҫтары менән ташландыҡ, буш торған, төҙөлөп ятҡан биналарға барырға, кеше булмаған парк, урманлыҡта йөрөргә ярамағанлығын шулай уҡ бәләкәй саҡтан күңеленә һеңдерегеҙ. Ҡайҙалыр киткәнендә кем менән, күпме ваҡытҡа һәм ҡайҙа юллангандарын ололар белергә тейешлекте һыҙыҡ өҫтөнә алығыҙ һәм был уның шәхси арауығына ҡыҫылырға тырышыуҙан түгел, ә уның өсөн борсолоуҙан эшләнгән аҙым булыуын аңлатығыҙ.

**Баланың хәүефһеҙлеге өлкәндәр ҡулында икәнлеген онотмағыҙ. "Аңғартылған, тимәк ҡоралланған", тигән хәҡиҡәтте күҙ уңында тотоп, балалар күңелһеҙ хәлдәргә тарымаһын өсөн тейешле ҡағиҙәләрҙе, яраған-ярамағанды бәләкәй саҡтан аңлатып үҫтереү мөһим.**

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*



# КӘРЗИН ҮРӘМ...

**Һәр хужабикә үҙ фатирын, йортон, ишек алдын йәки ҡала янындағы баҡсаһын уңайлы, матур һәм йәмле итергә тырыша. Һәм бының өсөн иң ҡулайлы ысул - төрлө сортлы гөлдәр һәм сәскәләр үҫтереү. Был осраҡта гөл һауыттарының да ыҡсым һәм матур булыуы мөһим. Минең яратып башҡарған шөғөләм хужабикәләргә нәҡ ошондай мөмкинлек бирә лә инде. Аныҡлап әйткәндә, мин төп эшемдән буш ваҡытта төрлө ҙурлыҡтағы, төҫтәге кашполар эшләйем.**

Кашпоның эсенә гөлдө һауыты менән дә ултыртырға була, шулай уҡ тупраҡ һалып, сәскәнең йәки гөлдөң үҙен генә лә сәсергә мөмкин. Үреп эшләнгән кашпо йортҡа йәки ихатаға бик күркәм төҫ бирә, ниндәй интерьерға булһа ла тап килеп тора. Үреп эшләнгән кашпоны гөл һауыты булараҡ ҡына түгел, шулай уҡ кәрзин йәки хужалыҡ тауарҙарын һалыу өсөн дә ҡулланырға мөмкин.

Ғәҙәттә, эш өсөн полиротанг тип аталған материал ҡулланам. Ул төрлө ҡалынлыҡта, киңлектә һәм төҫтә була, экологик яҡтан таҙа, һығылмалы. Хаҡы ла әллә ни ҡыйбат түгел, мин уны, ғәҙәттә, интернет аша яҙҙырып алам. Миңә айырыуса тәбиғи ағасты хәтерләткән материал оҡшай, уның менән эшләүе лә күңелле, кашполар ҙа матурыраҡ килеп сыҡҡан төҫлө.

Кашпоны махсус гөл һауытын уратып та эшләйем, шулай уҡ "үҙаллы" һауыт итеп тә үрәм. Матур әйбер килеп сыҡһын өсөн, әлбиттә, оҫтарыр кәрәк. Ҡул өйрәнеп, эштең айышына төшөнөп алһаң, бер уртаса кашпоны бер көн эсендә үрергә була. Миҫал өсөн 10-12 литрлыҡ кашпоны үреү өсөн яҡынса 600 грамм полиротанг ҡулланыла. Материалдың сығымы уның ҡалынлығынан, таҫма формаһының ниндәй булыуынан тора.

Был эш менән ике йылдай шөғөлләнәм, тәүҙә үҙем өсөн генә үрҙем, унан туғандарға һәм дуҫтарға эшләп бирҙем, йәйләп һатып алыусыларым да барлыҡҡа килде. Кашпо үреү буш ваҡытта ғына яратып башҡарған шөғөләм булыуын иҫәпкә алғанда, уның ваҡ-төйәккә тотонорлоҡ килем килтереүе ғаилә бюджеты өсөн бик тә ярап ҡала. Әле ошо уҡ материалдан мебель эшләп ҡарау теләге уянды. Был хыялым менән бүлешкәс, хеҙмәттәшем хатта алдан заказ да биреп ҡуйҙы - баҡсаһына үрелгән ултырғыстар һәм өҫтәл эшләп биреүҙе һораны. Ошо көндәрҙә башлармын тип торам.

Гәзит уҡыусылар араһында ла оҫта ҡуллы кешеләр бик күптәр. Бәлки, минең шөғөләм кемдеңдер күңеленә ятыр һәм килем килтереү сығанағына әйләнер, тип уйлап яҙҙым.

**Гөлдәр ХИСМӘТУЛЛИНА. Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Асҡын, Хәйбулла, Ҡариҙел һәм Нуриман райондарында төтөн таралды. Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, быға Ханты-Манси автономиялы округында урмандарҙың яныуы сәбәпсе. Әлеге ваҡытта Юғрала 65 янғын сығанағы иҫәпләнә. Республика буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында белдереүҙәренсә, Башҡортостанда бишенсе класлы янғын хәүефе һаҡлана.

✓14 августа Ҡаҙағстандың Кустанай ҡалаһында беренсе тапҡыр башҡорттарҙың боронғо "Йыйын" байрамы үткәрелә. Сараны "Азатлыҡ" башҡорт этномәҙәни берләшмәһе ойоштора. Программала - Сибай филармонияһы артистарының сығышы, спорт һәм традицион ярыштар, уйындар, шул иҫәптән милли көрәш. Еңеүсегә - ҡуй. Үҙешмәкәр йырсылар, бейеүселәр һәм инструменталистар сығыш яһай. Бал, шифалы үләндәр, сироптар һәм башҡа тауарҙар йәрминкәһе була.

✓Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһында балалар өсөн тәүге ял итеү үҙәге асылды. Башҡортостан ярҙамы менән ул үҫтереүсе һәм өҫтәл уйындары, мультимедиа һәм музыка ҡорамалдары, канцелярия кәрәк-ярақтары, спорт инвентары менән тулыһынса тәьмин ителгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ошо көндәрҙә Башҡортостандан гуманитар йөк тейәлгән 17-се автоколонна Луганск Халыҡ Республикаһына барып етте. Красный Луч ҡалаһына республикабыҙҙан балалар ялы үҙәге өсөн 2 тоннанан ашыу йыһаз-ҡорамалдар оҙатылды.

✓Радий Хәбировтың ҡарары менән Донецк һәм Луганск Халыҡ республикалары халҡын тормош кәрәк-ярақтары менән тәьмин итеү, инфраструктура объекттарын тергеҙеү мәсьәләләре буйынса БР Башлығының махсус вәкиле тәғәйенләнде. Был вазифа Дмитрий Дудкоға йөкмәтелде. Дмитрий Дудко Өфөлә тыуған. Өфө технологик сервис институтын тамамлаған. Төрлө ойошмала яуаплы эштәр башҡарған, етәксе булған. 2015 - 2022 йылдарҙа - "Медикал Групп" йәмғиәте етәксеһе. Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе. Халыҡтар Дуҫлығы ордены кавалеры.

✓ *Башҡортостан пляждарында иҫерек граждандарға штраф һалына башлаясаҡ, шуға ла муниципаль комиссиялар бындай хоҡуҡ менән әүҙемерәк файҙаланырға тейеш.*



ҠЫҪҠАСА

# ӨМӨТБАЕВТАР ФЕРМАҺЫ...

**Баймаҡ районындағы ҡымыҙ фермаһы Урал аръяғы буйлап турмаршруттарға индерелә.** Башҡортостанда гастрономия туризмының төрө булараҡ ҡымыҙ мәҙәниәтен үҫтереү өсөн республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығына Денис Өмөтбаевтың ҡымыҙ фермаһын (Баймаҡ районы) Урал аръяғы буйлап яңы турмаршруттарға индерергә ҡушты. Туристар өсөн маршрутта тәбиғәт ҡомарткылары - Ғәзелша шарлауығы, Граф, Талҡаҫ күлдәре, Ирәндек һырты һәм Мөжәүир хәҙрәттең ҡәбере бар. "Ә һунынан беҙ ошо урындарҙы "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек. Туризм" проектына һәм мәктәп туризмы программаһына индерербеҙ. Баймаҡ районының хозур урындарына тағы ла күберәк туристар килеп, шифалы ҡымыҙҙан ауыҙ итә алыр", - тип яҙҙы Назаров.

✓ **2022 йылда Башҡортостан аграрийҙары 4 миллион тоннаға яҡын ашлыҡ йыйып алырға ниәтләй, тип белдерҙе республика вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.** "Көтөлгән күрһәткестәр былтырғы кимәлдән ике тапҡырға тиерлек күберәк - ул саҡта беҙ 2,2 миллион тонна йыйып алдыҡ. Май бирә торған культуралар буйынса план - 500 мең тоннанан ашыу, шәкәр сөгөлдөрө буйынса иһә 1,3 миллион тонна. Быйыл беҙҙең алда бөтәһе 2 миллион 462 мең гектар майҙаны, шул иҫәптән 1 миллион 759 мең гектар иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар, шулай уҡ 480 мең гектар техник культуралар йыйыу бурысы тора", - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов. Урып-йыйыу эштәренә 3 960-тан ашыу комбайн йәлеп ителгән, был былтырғыға ҡарағанда 120-гә күберәк, тип өҫтәне министр.

✓ **Республикала өй яны һәм баҡса участкаларында үҫтерелгән продукцияны һатыу өсөн 3 767 ышыҡ урын булдырылған. Һатыу иткән өсөн аҡса түләргә кәрәкмәй.** "Әле беҙҙә 300-ҙән ашыу майҙансыҡта халыҡҡа уңайлы булһын өсөн өҫтәлдәр ҡуйылған, унда продукцияны теҙергә, ҡояштан йәшенергә мөмкин. Майҙансыҡтар граждандарға үҙ баҡсаһында үҫтергән йәшелсәне, еләк-емеште һатыу өсөн бушлай бирелә", - тип хәбәр итте сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев. Иң күп сауҙа нөктәләре - Өфөлә (568 урынлыҡ 34 майҙансыҡ), Стәрлетамаҡта (1977 урынлыҡ 16 майҙансыҡ), шулай уҡ Бөрө районында (385 урынлыҡ 6 майҙансыҡ). Хәтерегеҙҙә төшөрәбеҙ, республика етәксеһе Радий Хәбиров баҡсасыларҙың беренсе форумында шәхси хужалыҡта үҫтерелгән продукцияны һатыу өсөн уңайлы урындар булдырырға ҡушҡайны.

✓ **Башҡортостанда әлеге ваҡытта эшләгән глэмпингтар исемлеге баҫылған. Хәҙер унда яңы туризм төрөндәге 38 объект иҫәпләнә.** Республикала модулле отелдәр селтәрен үҫтереү туристар ағымын арттырырға ярҙам итергә тейеш, тип иҫәпләй эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов. Уның һүҙҙәренсә, был өлкәлә яңы эш урындары барлыҡҡа килер, шулай уҡ бюджетҡа һалым керемдәре артыр. Яңыраҡ Ҡырмыҫҡалы районында Natura Park глэмпингы асылды. Проектты тормошҡа ашырыуға 12 миллион һум самаһы аҡса һалынған һәм алты яңы эш урыны булдырылған. Тиҙҙән Башҡортостанда тағы ла бер нисә глэмпинг асыу планлаштырыла.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХӨКӨМ ИТЕЛГӘНДӘР ӨСӨН

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡалаға Бөтә Рәсәй енәйәт-башҡарыу системаһының йәш белгестәре форумында ҡатнашыу маҡсатында килгән Яза башҡарыу федераль хеҙмәте директоры Аркадий Гостев менән осрашты.**

Башҡортостан Республикаһы Башлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Аркадий Гостев республика етәкселегенең хөкөм ителгәндәр өсөн холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт үҙәктәрен асыу буйынса эшен юғары баһаланы. Башҡортостан Рәсәй Президенты Владимир Путиндың быйыл илдең һәр төбәгендә хөкөм ителгәндәр өсөн 400 яңы эш урыны булдырыу тураһында күрһәтмәһен үтәне тиерлек. Гостев әйтеүенсә, 2022 йылдың ете айында Яза башҡарыу федераль хеҙмәтенең төбәк идаралығы предприятиеларында тауар етештереү, башҡарылған эштәр һәм күрһәтелгән хеҙмәттәр күләме былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда өстән бер өлөшкә тиерлек артҡан.

Башҡортостан Башлығы элекке хөкөм ителгәндәрҙе социаль яраҡлаштырыуҙың мөһимлеген билдәләп, профилле министрлыҡтарға һәм ведомстволарға Яза башҡарыу федераль хеҙмәте продукцияһына, хеҙмәттәренә дәүләт һәм муниципаль заказдарҙы урынлаштырыу мәсьәләһен ҡарарға ҡушты.

# ТАҒЫ ӨС АУЫЛДА...

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға тағы ла өс территорияла алкоголь продукцияһын һатыуҙы тыйыу тураһында республика законы проекты индерелгән. Был хаҡта парламент рәйесе Константин Толкачев белдерҙе.**

- Барлыҡ кәрәкле процедураларҙы тамамлағандан һуң Көйөргәҙе районы Яҡшымбәт ауылы ҡабаттан проектты ҡарауға индерҙе. Уны сентябрҙәге пленар ултырышта ҡарарға ниәтләйбеҙ. Бынан тыш, шундай уҡ инициатива менән Стәрлетамаҡ районының Ҡантүккән һәм Ейәнсура районының Байдәүләт ауылы мөрәжәғәт итте. Ике проект та октябрь планына индерелгән, - ти ул.

Парламент спикеры әйтеүенсә, әлеге ваҡытта тиҫтәләгән ауыл "коро закон" индереү өсөн документтар әҙерләй. "Республикала бындай практика юҡ, шуға ҡайһы бер депутаттар был эштең һөҙөмтәлелегенә ышанмай. Шуға ҡарамаҫтан, граждандар үҙҙәренең биләмәләрендә спиртлы продукцияны һатыуҙы тыйыу хоҡуғына эйә һәм уны ҡулланырға теләй, - ти Константин Толкачев. - Ҡарар граждандар сходында ҡабул ителә, һунынан документтар йыйыла. Артабан муниципаль район Советы Дәүләт Йыйылышына закон проектын индерә. Был тема ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырғанлыҡтан, беҙҙең юристар һәр аҙымды аңлатып, план төҙөнө, уның буйынса закон проектын әҙерләү еңеләшә".

Бөгөн Башҡортостанда Көйөргәҙе районының бығатиклем дә алкоголь һатылмаған Яҡут ауылында ғына "коро закон" индерелгән. "Бында айырым хәл-торош, - тип аңлата Константин Толкачев. - Ауылда һуңғы ике йылда алкоголь бөтөнләй һатылмаған, бер генә эшҡыуарҙың да бығаа лицензияһы булмаған. Әммә ауыл эргәһендә төрлө яҡтан ял итеүселәр килгән күл бар. Урындағы халыҡ, популяр урын эшҡыуарҙарҙы лицензия алып спиртлы эсемлектәр һатырға этәрер, тип хафаланып, үҙҙәрен алдан уҡ бындай киләсәктән ҡурсалап ҡуя".

Парламент спикеры "коро закон"дың халыҡты сәләмәт йәшәү рәүешенә өйрәтеүҙә берҙән-бер ысулы түгеллеген билдәләй - халыҡҡа спорт, мәҙәни, мәғрифәтселек һ.б. киң күләмле саралар рәүешендә сәләмәт тормош альтернативаһы бирергә кәрәк.

# ЭСКӘНДӘР ПЛЯЖДА ЙӨРӨМӘҺЕН

**Хөкүмәт Йортонда һыу объекттарында кешеләрҙең именлеген тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үтте.**

Вице-премьер Ирек Сәғитов белдереүенсә, Башҡортостан пляждарында иҫерек граждандарға штраф һалына башлаясаҡ, шуға ла муниципаль комиссиялар бындай хоҡуҡ менән әүҙемерәк файҙаланырға тейеш. Ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм бөтөрөү буйынса республика комиссияһы ултырышында халыҡтың күпләп ял итеү урындарында иҫкәртеү тәркөмдәре менән патруллек итеү бурысы ла ҡуйылды. "Республикала муниципаль берәмектәр комиссияларының административ йөгөнтө яһау сараларын ҡулланыу эшен әүҙемләштереү мөһим. Тәү сиратта был сараларҙы һыуҙа кешеләрҙең ғүмерен һаҡлау ҡағиҙәләрен боҙған, тыйылған урындарҙа спиртлы эсемлектәр ҡулланған, йәмәғәт урындарында иҫерек йөрөгән кешеләргә ҡулланырға кәрәк. Муниципалитет хакимиәттәре бөтәһе 400 иҫкәртеү төркөмө ойошторған, уларҙың дөйөм һаны - 952", -тине Ирек Сәғитов. Вице-премьер административ комиссияларҙың хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү йәһәтенән дә эшен көсәйтеү кәрәклеген әйтте.

# ТУРИСТАРҘЫ ҠЫҘЫҠТЫРЫП...

**Рус география йәмғиәте төбәк бүлексәһенең Мәләүез районында уҙған күсмә кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар "Торатау" һәм "Янгантау" геопарктары эшмәкәрлеге мәсьәләләрен дә тикшерҙе.**

"Торатау" геопаркының фән, мәғариф, экология һәм туризм үҙәге директоры Сәйҙә Суворова һөйләүенсә, быйыл ноябрҙә махсус йыһазландырылған тимер баҫыс - тауға менеү өсөн 5,65 саҡрым оҙонлоҡтағы экоһуҡмаҡ һалыу тамамлана. Бында 80 автомобилгә иҫәпләнгән парковка булдырыла, шулай уҡ яңы тирмәләр ҡороу ҡаралған. Баҫҡыс төҙөү үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһын, уникаль тәбиғи байлыҡты һаҡлау өсөн кәрәк. Әле Торатау битләүендә 40-ҡа яҡын һуҡмаҡ бар. Уларҙың һәр береһе - тапалған һәм юҡҡа сығарылған үҫемлектәр һыҙаты, был һунынан флора һәм фаунаның, шул иҫәптән һирәк осраған һәм Ҡыҙыл китапҡа индерелгән төрҙәрҙең юҡҡа сығыуына килтереүе мөмкин. Махсус экоһуҡмаҡ-баҫҡыс менгәндә һәм төшкәндә туристар хәрәкәтен яйға һалырға мөмкинлек бирә. Ҡунаҡтарға уңайлы булһын өсөн баҫҡыста ял итеү зоналары һәм мәғлүмәт стендтары булдырыла.

Башҡортостан Башлығы республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығына геопарктар янындағы туристик инфраструктураны комплекслы үҫтереү проектын еренә еткереп эшләргә ҡушты. "Быйыл туристар өсөн Торатауға экоһуҡмаҡ-баҫҡыс асабыҙ, - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров. - Шулай итеп, йыл һайын яңы объекттар асырға, республика ҡунаҡтарын һәм халҡын йәлеп итеү өсөн уңайлы урындар булдырырға тиған маҡсатты тормошҡа ашырабыҙ".

Билдәләнеүенсә, "Янгантау" геопаркында өс өҫтөнлөклө объект билдәләнә. "Мәсетле" геологик музей комплексы, "Каруанһарай" этнографик комплексы һәм "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексы. Проект-тикшеренеү эштәренә 50 миллион һум бүленгән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң Транспорт инфраструктураһы идаралығы муниципаль электр транспортында юл хаҡының үҙгәреүе тураһында белдерҙе. Ҡулаҡса һәм банк картаһы менән түләгәндә 30 һум була. "Алға" картаһы менән 25 һум, уҡыусыларға - 15 һум. Пассажирҙар ташыу хеҙмәтен күрһәтеүгә максималь тарифтар билдәләү тураһында тейешле ҡарар ҡала хакимиәте сайтында баҫылған. Хаҡты 2022 йылдың 16 сентябренән арттырыу ҡаралған.

✓Рәсәй авиацияһы ведомство-ара комиссия ҡарары менән Өфө аэропортынан тағы өс халыҡ-ара авиарейсын асырға рөхсәт бирҙе."Азур Эйр" авиакомпанияһы Башҡортостандың баш ҡалаһы менән Дубай (Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре) араһында авиаосоштар башҡарыр тип планлаштырыла. Шулай уҡ "Ютэйр" авиакомпанияһы Өфө менән Тажикстандың баш ҡалаһы Дүшәнбе араһында авиаосоштарға рөхсәт алды. "Урал һауа юлдары" Өфө аэропортынан Ҡырғыҙстандың Ош ҡалаһына оса башлай.

✓Октябрь проспектында автобустар өсөн тиҙлек режимы сәғәтенә 50 саҡрымға тиклем сикләнә. Бындай ҡарар юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында ҡабул ителгән. Ошо көндәрҙә тейешле юл билдәләрен ҡуя башлайҙар. Шулай уҡ үҙгәрештәр юл хәрәкәте өлкәһендәге административ боҙоуҙарҙы автоматик рәүештә теркәү системаһына индерелә.

✓Өфөнөң Пушкин урамында урынлашҡан "Башнефть" йорто төбәк әһәмиәтендәге мәҙәни мирас объекттарының берҙәм дәүләт реестрына индерелде. Документтан күренеүенсә, шулай уҡ 1954-1958 йылдарҙағы бина һәм һәйкәл биләмәһенең сиктәре һәм файҙаланыу режимы раҫланған. Атап әйткәндә, капиталь төҙөлөш, ерҙе мелиорациялау һәм башҡа эштәр, объектты ҡыйлау һәм юҡ итеү тыйыла.

✓Шишмә районында урынлашҡан "Патриот" паркында Физкультурниктар көнө "Геройҙар ярышы" форматында үткәрелә. Унда республиканың дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәре ҡатнаша. Абруйлы ҡунаҡтар - Рәсәй йыйылма командаларының спорт әҙерлеге үҙәге директоры Георгий Брюсов, баскетбол буйынса олимпия чемпионы Светлана Антипова һәм баскетбол буйынса легендар олимпия чемпионы Иван Едешко. Сара 13 августа иртәнге сәғәт 10-да асыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Мәғлүм булыуынса, 1 сентябрҙән дөйөм йорт милкен тотоу (содержание общедомового имущества - артабан: СОИ) өсөн ҡулланылған коммуналь ресурстарға (лифттар эшләһен, подъездарҙа лампочкалар янһын өсөн файҙаланылған электр энергияһы, подъездарҙа йыуыу һәм йылытыу системаларын йыуҙырыу өсөн тотонолған һыу һ.б.) түләү яңыса башҡарыла башлаясаҡ.**

# ЯҢЫСА ИҪӘПЛӘП...

## уңырбыҙмы, туңырбыҙмы?



Ай һайын милекселәр фатирҙарында ҡулланылған коммуналь ресурстар өсөн иҫәпләгестәр күрһәткесе буйынса түләй ине. Әгәр фатирҙа иҫәпләгес юҡ икән, иҫәп-хисап норматив буйынса билдәләнә. Йәғни милекселәр фатирҙарҙа ҡулланылған ресурс өсөн түләй ҙә, дөйөм йорт милкен тотоу өсөн сығымды ресурс менән тәьмин итеү ойошмалары идара итеү компаниялары елкәһенә һалып, улар идара итеү компанияһы өсөн ҡуйылған норматив күләмендә генә милекселәрҙән түләтә ине. Һәм бик йыш айырманың нормативтан артып китеүе күҙәтелә. Һөҙөмтәлә идара итеү ойошмаларының бурысы йыйыла һәм улар банкротҡа сыға.

Нормативтан артыҡ күләм ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң? Быының сәбәптәренең береһе булып фатирҙарҙағы иҫәп ҡорамалдарының күрһәткестәрен ваҡытында тапшырмау һәм фатирҙа йәшәүселәрҙең һанын дөрөҫ итеп күрһәтмәү тора. Мәҫәлән, фатирҙа иҫәпләгес тора, әммә хужа норматив буйынса түләй. Әлбиттә, ул экономиялау тураһында уйламай ҙа: краны ағып торһа ла, бәҙрәфтә һыу туҡтамаһа ла уны сығымдар борсомай, сөнки ай һайын билдәле бер күләмде генә түләй. Ә унын фатирында бушҡа ағып торған һыу дөйөм йорт ихтыяжы булып теркәлә. Бынан тыш, норматив буйынса түләгән фатирҙарҙа норматив теркәлгән кешеләр һанынан сығып иҫәпләнә. Әммә унда бер кеше теркәлеп, ғәмәлдә ике-өс, йәиһә дүрт кеше йәшәүе мөмкин. Был күберәк ресурстар ҡулланыуға килтерә.

Тағы бер сәбәп - шәхси иҫәп ҡорамалы ҡуйылған фатирҙарҙа йәшәүселәр күрһәткестәрҙе ваҡытында тапшырмай йәки уларҙы кәметеп күрһәтә. Идара итеү компанияһының подвалдарҙа ағып торған һыуҙы ваҡытында туҡтата һалмауы - сәбәптәрҙең тағы береһе. Подвалда һыу әҙләп кенә аҡһа ла, айына ул бер нисә кубометрға етергә мөмкин. Был да СОИ графаһындағы түләүгә индерелә. Йылылыҡ та коммуналь ресурс булып һанала, әммә уның буйынса СОИ иҫәпләнмәй, сөнки дөйөм йорт иҫәпләгесендә теркәлгән күләм һәр фатирҙың майҙанына бүленә һәм тарифҡа ҡабатлана. Дөйөм йорт иҫәпләгесе булмағанда, йылылыҡ норматив буйынса бүленә. Шуға күрә йылылыҡ өсөн иҫәпләшеүҙә үҙгәрештәр булмаясаҡ.

Дөйөм йорт милкен тотоуға түләүҙе нисек кәметергә? Муниципалитетта белдереүҙәренсә, был граждандарҙың процесты үҙҙәре нисек контролләүенә бәйле буласаҡ. Бында йорт советтары ҙур роль уйнай. Йорт советы булған һәм ул әүҙем эшләгән урында түләүҙәр артыҡ артмаҫ та, хатта улар бөтөнләй булмаҫ та, тип күҙаллана.

Әйткәндәй, халыҡ күрһәткестәрҙе дөрөҫ тапшырһын өсөн баш ҡалала абонент хеҙмәте булдырылған. Уның хеҙмәткәрҙәре фатирҙар буйлап йөрөп, иҫәпләгестәрҙең күрһәткестәрен тапшырылған мәғлүмәт менән сағыштырасаҡ.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Рим БУЛАТОВ, Өфөнөң Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге йәмәғәт контроле үҙәге етәксеһе:*** Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 3 февралдә ҡабул иткән 92-се Ҡарарын тормошҡа ашырыуға идара итеү компанияларының ғына түгел, ниндәйҙер кимәлдә күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең именлеге лә бәйле. Бәлки был бик абсурд яңғырар, әммә идара итеү компанияларының бурыстарынан ҡотолоп, аҡса эшләүен һәм халыҡҡа лайыҡлы хеҙмәт күрһәтеүен теләһә, милекселәр ҡарарҙы хуплар. Ләкин уларҙы тормошҡа ашырыр өсөн ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙың, идара итеү ойошмаларының, күп фатирлы йорттар советтарының берлектәге тырышлығы кәрәк. Бөгөн ТКХ өлкәһендә иң төп проблема - халыҡтың хеҙмәттәрҙән ҡулланған өсөн бурысы йыйылған һәм ул бер нисә миллиардҡа етеп, арта бара.

Беҙҙең ойошма Өфө ҡалаһының Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ муниципаль-бюджет учреждениеһы, ресурс һәм идара итеү ойошмалары менән һуңғы айҙарҙа бик күп осрашыуҙар үткәрҙе, уларҙа ҡарарҙы тормошҡа ашырыу, мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә нисек бергә эшләү юлдарын ҡараны. Айырым күп фатирлы йорттарҙағы хәл-торошто анализлап, дөйөм йорт милкен тотоу өсөн 1 сентябрҙән түләүҙәрҙе үҙгәртеүҙең һөҙөмтәһен күҙалланыҡ һәм, үкенескә күрә, сумма бәләкәй түгеллеген күрҙек. Шул уҡ ваҡытта уны кәметеү мөмкинлектәрен дә эҙләнек. Улар етерлек һәм дөйөм йортто һыу менән тәьмин итеү системаһында тәртип булдырыуҙан алып, фатирҙарҙағы иҫәп ҡоролмаларын контролләүҙе көсәйтеүҙе үҙ эсенә ала.

Әммә ҡануниәтте үҙгәртеү талап иткән мәсьәләләр ҙә бар, мәҫәлән, ресурс менән тәьмин итеү ойошмалары контролерҙарының фатирҙарҙағы иҫәп алыу ҡорамалы күрһәткесен 3 ай, хатта ай һайын тикшереүҙе индереү зарур. Шулай уҡ бурысын түләмәгәндәрҙе фатирҙарынан сығарыу мәсьәләһе лә мөһим. Бер нисә йыл элек Һупайлылағы муниципаль фатирҙа йәшәүселәрҙе Шаҡшаға күсереп, тапшырыуҙы күп тапҡырҙар телевидение аша күрһәткәс, бурыслылар шунда уҡ бурыстарынан ҡотола башланы, аҡсаһын да тапты.

Сентябргә тиклем ваҡыт бик аҙ ҡалды. Йәйгеһен халыҡтың ҡаланан ситтә, баҡсаларында йәшәүен иҫәпкә алғанда, был мәсьәләне хәл итеүе еңел булмаясаҡ.

***Аэлита ЙОНОСОВА, Рәсәй урамындағы күп фатирлы йорт советы рәйесе:*** Яңы ҡарарҙы ҡуллана башлағас, идара итеүсе ойошмаларҙа хәлдәр үҙгәрерме? Бурыстарҙы нимә эшләтерҙәр, банкротлыҡ процедуралары бөтөрмө? Минеңсә, барыһы ла шул килеш ҡаласаҡ. Шул уҡ ваҡытта күптәрҙе идарасы ойошмаларҙың шул тиклем бурысы ҡайҙан барлыҡҡа килеүе аптырата, сөнки беҙ, милекселәр, сығымдарҙың 97-98 процентын түләйбеҙ, йорттарҙың ҙур өлөшө нормативта тора.

Күп фатирлы йорт менән идара итеү - ул дөйөм йорт милкен тотоу буйынса ҙур эш башҡарыу. Идара итеү компаниялары тулы күләмдә сифатлы хеҙмәтте ваҡытында күрһәтергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта килешеүҙе үтәү буйынса отчеттарҙа беҙ махсус өҫтәп яҙыуҙар, йәнәһе лә, идара итеүсе ойошмаларҙың сығымдары артыуын күрәбеҙ. Килешеү даими рәүештә боҙола. Бынан тыш, бөгөн иң ҙур хоҡуҡ боҙоу - ул милекселәрҙең дөйөм йорт милкен тотоуҙа күрһәтелергә тейешле хеҙмәттәрҙе башҡарыу өсөн түләгән маҡсатлы аҡсаһын ойошманың кредитор бурыстарын ҡаплау өсөн тотоноу. Тағы ла шуға иғтибар йүнәлткем килә: йәйгеһен селтәрҙәрҙә ремонт эшләнә, бик йыш эҫе һыу туҡтатыла. КРСОИ өсөн эҫе һыу норматив буйынса иҫәпләнә. Идара итеүсе ойошмалар ремонт ваҡытында һыу туҡтатылып торған осор өсөн ҡайтанан иҫәп яһаймы? Юҡ. Ҡыҫҡаһы, бер нәмә анализланмай, берәү ҙә ҙур күләмле түләүҙәрҙең сәбәбен асыҡламай. Беҙ "Водоканал" буйынса мәғлүмәттәрҙе анализлай башлағайныҡ, нормативтан артыҡ күрһәткес 2000 кубометр килеп сыҡты. Уны тимер юлы цистерналары менән үлсәһәк, ҙур бер состав булыр ине. Ул һыуҙы кем ҡулланған? Сәбәбе: хата киткән йәиһә мәғлүмәттәр дөрөҫ ултыртылмаған. Әммә быны берәү ҙә тикшермәй.

Ошо әйткәндәрҙе йомғаҡлап, шундай һығымта яһарға була: ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмалар һәм идара итеүсе ойошмалар араһында мәғлүмәттәр менән алмашыу аныҡ яҙылырға тейеш; иҫәптә тап КРСОИ нормативы ингән майҙандарҙы тикшереп сығырға, торлаҡ булмаған биналарҙың исемлеген төҙөргә кәрәк. Әлбиттә, ресурстар ҡулланыуҙы контролләү бик мөһим. Бында йорттоң ҡулланылыуға тапшырылыуын ваҡытында теркәп, актты ресурстар менән тәьмин итеү ойошмаһына бирергә кәрәк. Юҡһа, ресурстар ҡулланыуҙа айырма килеп сыға һәм барлыҡ түләүҙәрҙе бутаған төҙәтеүҙәр башлана.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Керән

❖ Керән ярҙамында глистарҙан ҡотолорға була. Ҡырғыстан үткәрелгән 20-шәр грамм керән һәм һарымһаҡҡа 0,5 литр араҡы ҡойоп, 10 тәүлек төнәтергә. Көнөнә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Стенокардиянан борон былай дауаланғандар: керән тамырының һутын һығып алып, яртылаш бал ҡушып болғарға. Иртәнге аштан бер сәғәт алда 2 балғалаҡ ашарға (гел болғатырға). Был рәүешле 1 ай дауаланырға. Үҙеңде насар тойғанда дауа күләмен (доза) кәметергә. Ике айҙан һуң ҡабат дауаланырға була.

❖ Тәндә таптар (пигмент), һипкел булһа һәм ҡояшҡа янғанда 50 грамм ҡырылған керәнгә 250 мл аш һеркәһе ҡойорға (9 процентлы). Шешәне тығыҙ бөкө тығып ябырға һәм ҡараңғы һалҡын урынға ҡуйырға. 2 аҙнанан төнәтмәне һөҙөргә һәм 1,5 литр һыуыҡ һыу өҫтәргә. Ошо шыйыҡса менән битте иртәнсәк һәм кис ҡоротҡансы һөртөргә.

### Мәтрүшкә

❖ Ҡара ҡылау (катаракта) ауырыуын иҫкәртә был үлән. 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп әҙерләнгән төнәтмәне көнөнә 2-3 тапҡыр 1/3 стакан эсәләр.

❖ Мәтрүшкә баш ауырығанда ла ярҙам итә. 1 ҡалаҡ үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 минут ҡайнатырға, йылымысланғансы ултыртып ҡуйырға һәм шуның менән башты йыуырға. Баш тиреһен һәм сәс төптәрен нығыраҡ сылатырға тырышырға кәрәк. Шунан башҡа яулыҡ урап, ярты сәғәт тоторға. Мигрень булғанда ла ярҙам итә.

### Сейә

❖ Ашҡаҙан һәм бөйән сейле яраһы (язва) менән яфаланғанда 2 балғалаҡ сейә тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм 5 минут ҡайнатып алырға. Шунан 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан 20-30 минут алда көнөнә 3-4 тапҡыр бер сирек йәки стакандың өстән бер өлөшө миҡдарында эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Эш хаҡы алған һайын уны тулыландыраһың һәм кәрәкле ваҡытта алып тотонаһың. Әлбиттә, аҡсаны был рәүешле тотоноу өсөн кеше үҙендә дисциплина тәрбиәләргә тейеш.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Башҡорт ижауҙарының төбө бер аҙ йоморайтып эшләнгән, семәрле тотҡаһы оҙон булмаған. Ижауҙың һоҫҡоһонoң оҙонлоғо 11 сантиметрҙан 17-гә тиклем, киңлеге шунан 1-2 сантиметрға кәмерәк йә күберәк булған. Сөңкәлеге 2,5-3 сантиметр булған, ҡайһы берҙәренең генә сите 4,5 сантиметрға ҡалҡып торған. Тотҡаһы һоҫҡоһо менән тигеҙ, йәки 2-5 сантиметрға оҙонораҡ булған. Ижау тотҡаһын биҙәгәндә оҫтаның шәхси үҙенсәлектәре ныҡ сағылған. Беҙҙең заманға бер-береһенә оҡшамаған тиҫтәләгән ижауҙар һаҡланған.

Биҙәү-ғәмәли сәнғәт өлгөләре араһында семәрле ижауҙар матурлығы менән айырылып торған. Дини ҡанундарға ҡарамаҫтан, уларҙа тереклек сағылдырылған. Йыш ҡына ҡоштар һынландырылған. Уның һыҙаттары шартлы рәүештә бирелгән: ижау бер аҙ оҙонсараҡ формала, өҫкә күтәрелеберәк торған алғы өлөшө ҡойроҡто хәтерләтә, ул бөгөлөп киткән һәм аҫҡы яғында түңәрәк тишеге (күҙ?) менән сығынтыһы (суҡыш?) булған тотҡаһына талғын ғына күсә; һуңғыһы ижауҙы тәпән ситенә элеп ҡуйыу мөмкинлеге биргән. Шулай уҡ бындай төҙөлөш ҡымыҙҙы туҫтаҡтарға ҡойғанда ҡулай булған. Бындай ижауҙар төрлө варианттарҙа Урал аръяғында - Башҡортостанда ла, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләрендә лә киң таралған. Был күлдәргә һәм һыу ҡоштарына бай төбәк. Ырымбур башҡорттарында ла осратырға булған уларҙы. Әммә Урал аръяғының көнсығыш урман-дала ерҙәрендә ижауҙы урындағы ҡайындарҙан эшләһәләр, Ырымбур далаларына уны таулы Уралдан алып килгәндәр.

Ҡош башына оҡшаш киң һәм ныҡ торған ижауҙарҙан тыш, Ҡурған өлкәһендә (атап әйткәндә Әбделмән ауылында) аҫҡа ҡарай бөгөлгән, өҫтөндә ҙур булмаған сығынтыһы "кикрек"те хәтерләткән нәҙек тотҡаһына талғын ғына күскән иңкеү һоҫалы тағы ла нәзәкәтлерәктәре булған. Ҡайһы бер осраҡта һоҫаһы йоҡа ғына ярылар менән ҡапланған, улар киҫешкән урында урынынан шылмалы сыңға менән биҙәлгән. Ижауҙы һәм уны биҙәгән деталдәрҙе бер бөтөн әҙерләмәнән һырлай алыу юғары оҫталыҡ иҫәпләнгән.

Дөйөмләштерелгән ҡош образының төрлө варианттары Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы ижауҙарҙа ла күренә. Һаҡмар йылғаһы буйында ижау эшләү мауыҡтырғыс һәм абруйлы хеҙмәт һаналған. Һаҡмар йылғаһының урта ағышында урынлашҡан бер төркөм ауылдарҙа (1-с Бөрйән улусы) Ишбирҙе ауылындағы оҫталарҙың эше юғары баһаланған. Ижауҙарҙы был урындан көньяҡтараҡ һәм төньяҡтараҡ ятҡан ерҙәрҙә лә һырлағандар. Шулай уҡ бында таулы 3-сө Бөрйән улусынан да алып килгәндәр.



*Ҡымыҙ ижауҙары: 1, 2 - Ҡурған өлкәһе, Сафакүл районы Әбделмән ауылы; 3 - Бөрйән районы Байназар ауылы; 4 - Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылы; 5 - 2-се Этҡол ауылы; (1-4 - РЭМ фондынан, 5 - 1971 йылғы экспедиция). Рәссамы В.М. Шутова*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ФИНАНС МӘКТӘБЕ

# ТИН ҺУМДЫ ҺАҠЛАЙ.

## Ә һин был ҡағиҙәне беләһеңме?

**Нисек аҡсаны тәләфләмәй тотонорға өйрәнергә? Шәхси йәки ғаилә бюджетын нисек планлаштырырға? Ошо өлкәләге файҙалы кәңәштәр менән Башҡортостан Милли банкының финанс грамоталылыҡ буйынса белгесе Анна КАМЕНЕВА бүлешә.**



**➔ Шәхси бюджетты формалаштырыуҙың төп ҡағиҙәләре ниндәй?**

Беренсенән, һәр кеше йәки һәр ғаилә, эш хаҡының кимәленә ҡарамайынса, аҡсаһын әҙ генә булһа ла һаҡлауға ҡалдырып барырға тейеш. Башта уның күләме эш хаҡының 1 проценты ғына булһын, ти, ә иң яҡшыһы - килемдең 10 процентын туплап барыу. Эш хаҡы йәки башҡа берәй килем алдығыҙ икән, тупланмағыҙҙы шунда уҡ тулылындырып ҡуйыу мөһим, унан һуң ғына башҡа сығымдарға тотона башларға була.

Тормошта төрлө мәлдәр килеп тыуыуы мөмкин. Мәҫәлән, эштә ҡыҫҡартырға мөмкиндәр йәки оҙайлы ауырып китеү ихтималлығы бар һәм башҡалар. Ошондай ауыр мәлдәрҙе кредиттарға батмайынса ғына үткәреп ебәреү өсөн финанс мендәр кәрәк тә инде. Һәм уның күләме ғаиләгеҙ 3 - 6 ай йәшәрлек булырға тейеш.

Икенсеһе - мотлаҡ түләүҙәр. Эш хаҡы алдығыҙмы - коммуналь түләүҙәрҙе, кредит, балалар баҡсаһы һәм мәктәп, интернет һәм мобиль бәйләнеште түләргә кәрәк. Шулай уҡ бензинға ла аҡса бүлеү тураһында онотторға ярамай. Ҡалған сумманы ай дауамында тотонорға була. Бюджетты формалаштырыуҙың төп ҡағиҙәләре ошоларға ҡайтып ҡала.

**➔ Бөтә сығымдарҙы ла күҙҙәларға һәм аҡсаны экономиялы тотонорға өйрәнергә мөмкинме?**

Ғөмүмән, финанс план алып барыу мөһим. Уны дәфтәрҙә йәки компьютерҙа Excel таблицаһында һәм башҡа төрлө ысул менән эшләргә була. Бөтә сығымдарҙы ла анализлай башлағанда артыҡ сығымдар күҙгә тиҙ ташлана. Кәрәкмәгән сығымдарҙы һәр кем эшләй, ләкин финанс план алып барғанда уны күрергә һәм артыҡ сығымдарҙан ҡотолорға була. Мәҫәлән, магазинға барған һайын пакет һатып алыу йәки башҡа төрлө кәрәкмәгән әйберҙәргә аҡса түгеү кәрәкмәй. Аҙыҡ-түлекте алдан яҙылған исемлеккә ярашлы һатып алыу кәрәкмәгән күп сығымдарҙан ҡотолорға ярҙам итә.

Артабан - ҙур әйберҙәр һатып алыуҙы һәм даими сығымдарҙы планлаштырыу. Мәҫәлән, йыл һайын автомобилгә страховка эшләтергә кәрәк. Ваҡыты килеп еткәс, тейешле сумманы ҡайҙан алырға белмәй аптырангансы, алдан нәҡ шуның өсөн махсус аҡса йыйып барыуҙы юлға һалыу. Эш хаҡы алған һайын уны тулыландыраһың һәм кәрәкле ваҡытта алып тотонаһың. Ошо уҡ схеманы балаларҙы мәктәпкә йыйғанда ла ҡулланырға була. Әлбиттә, аҡсаны был рәүешле тотоноу өсөн кеше үҙендә дисциплина тәрбиәләргә тейеш. Һәм шулай уҡ балаларҙы ла аҡсаны дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү мөһим. Мәҫәлән, бер айға тәғәйенләнгән аҡсаны бер юлы бирергә лә, уны нисек тотоноуын ҡарарға. Әгәр ҙә айлыҡ сығымдарын өс көн эсендә тотоноп бөтһә, икенсе айға тиклем башҡаса аҡса бирмәҫкә. Был баланы аҡса менән дөрөҫ эш итергә өйрәтәсәк.

**➔ Күпселек кеше, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар өсөн, магазиндар буйлап йөрөү нык оҡшай. Кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, тағы ла бер күлдәк йәки башҡа әйбер алыу ғәҙәте менән нисек көрәшергә?**

Ысынлап та, магазиндарҙа ҡайһы берәүҙәр күп аҡса ҡалдыра, ә һөҙөмтәлә күпселек әйберҙәр кейелмәйенсә, шкафтарҙа тора. Әгәр ҙә магазиндар буйлап йөрөгәндә ниндәйҙер әйбер оҡшай икән, шунда уҡ һатып алмағыҙ. Бер аҙ йөрөп килегеҙ, ул ысынлап та һеҙгә мотлаҡ кәрәкме-юҡмы икәнлеген уйлағыҙ. Бәлки ошо уҡ әйбер ике бүлек аша урынлашҡан магазинда осһоҙораҡтыр, ә, бәлки, интернет-магазиндарҙа сағыштырып ҡарау урынлы булыр.

**➔ Хәҙер ҡулаҡса менән ҡулланыусылар бик һирәк. Картанан аҡса юғалмаһын өсөн ниндәй хәүефһеҙлек сараларын ҡулланырға була?**

Сығымдарҙы контролдә тотоп та, картанан бөтә аҡсаны алып киткән мутлашыусылар ҡулына эләгергә мөмкин. Был хаҡта күп яҙалар һәм һөйләйҙәр, ләкин мутлашыусылар ҡорбандары кәмемәй. Тәү сиратта, телефоныгыҙға шылтыратҡан билдәһеҙ номерҙарға яуап бирмәгеҙ, смс аша килгән ссылкаларға күсмәгеҙ. Шулай ҙа мутлашыусылар ҡулына эләгеп, бөтөнләй аҡсаһыҙ ҡалмау юлы - ул бөтә аҡсаны ла бер картала тотмау. Һәм ул карталар төрлө банктыҡы булыуы яҡшыраҡ.

ҺОРАУ - ЯУАП



# АҠСАНЫ ҠАЙТАРЫРҘАРМЫ?

**▸ Фатир һатып алдыҡ. Ул ике кешенең милкендә иҫәпләнеп, уларҙың берәүһе ышаныс ҡағыҙына таянып, беҙгә үҙ өлөшөн һатты. Хәҙер килеп милектең икенсе хужаһы ышаныс ҡағыҙын иҫәптән сығарып, фатир һатыу-һатып алыу тураһындағы килешеүҙе тарҡатып, фатирҙы тулыһынса үҙенә ҡайтармаҡсы. Беҙгә күрһәтелгән ышаныс ҡағыҙында иһә ышаныс белдерелгән (доверенное лицо) кеше, йәғни беҙгә фатирҙағы бер өлөштө һатыусы, милекте һата ала, тиелгән ине. Һатып алған милкебеҙҙән ҡолаҡ ҡағырбыҙмы икән ни? Ә һатыусы аҡсаһын кире ҡайтарыуҙан баш тартһа, ни эшләргә?**

- Әгәр һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөлгән һәм ҡул ҡуйылған ваҡытта ышаныс ҡағыҙы биргән кеше уны кире ҡайтарыуҙы һорап мөрәжәғәт итмәһә, һәм ышаныс ҡағыҙында, һеҙ әйткәнсә, ышаныслы кешенең был килешеүҙе уҙғара алыу хоҡуғы билдәләнгән булһа, һеҙҙең килешеүҙе юҡҡа сығарып булмай. Шулай итеп, милектең бер өлөшөнә хужа кеше һеҙгә, килешеү төҙөлөп, ул тейешле органдарҙа теркәлгәндән һуң, бер ниндәй ҙә дәғүә белдерә алмай.

# ИРЕМДЕҢ ПЕНСИЯҺЫН...

**▸ Ирем мәрхүм булды. Пенсия фондында уның тупланған пенсияһы (накопительная пенсия) бар. Уны мин алырға хоҡуғым бармы?**

Уның мираҫына ингәндә ирегеҙҙең тупланған пенсияһын алырға мөмкинһегеҙ. Ләкин бының өсөн түбәндәге шарттарҙың үтәлеүе мөһим:

- ирегеҙҙең вафатынан һуң ярты йыл үтмәгән;
- пенсияһының ниндәй пенсия фонды иҫәбендә икәнлеген беләһегеҙ (Дәүләт пенсия фонды йәки Дәүләткә ҡарамаған пенсия фонды);
- ирегеҙҙең мираҫына ингәнһегеҙ;
- рәсми никахта торған булғанһығыҙ;
- ирегеҙҙең тыуған йылы 1967 йылдан һуңғараҡ булмаҫҡа тейеш.

Ошо пункттар теүәл үтәлгән осраҡта, ирегеҙҙең тупланма пенсияһы ятҡан пенсия фондына ғариза алып барып бирергә кәрәк. Шулай уҡ әгәр ҙә ирегеҙ үҙе иҫән саҡта, мәрхүм була ҡалһа, тупланма пенсияһын кемгә түләргә икәнлеген асыҡлаған ғариза ҡалдырһа, пенсия фонды нәҡ шул ғаризаға таянып эш итергә тейеш. Әгәр ҙә ул ғаризала һеҙҙең исем булмаһа, уның тупланма пенсияһына дәғүә итә алмайһығыҙ.

Һәм тағы ла кеше вариҫсы итеп танылған осраҡта, мәрхүм булыусының булған бөтә бурыстары ла вариҫсыға күсә икәнен онотмағыҙ. Тупланма пенсия күләме бурыстарҙы ҡапларға етмәйенсә, үҙегеҙ бурыслы булып ҡалыуығыҙ ихтимал.

**✓ Уларҙа үлгәндәрҙе киң һәм тәрән соҡорҙарға, бөгөлгән рәүештә, уң ҡабырғаһында, башы менән көнсығышҡа йәиһә төньяҡ-көнсығышҡа ҡаратып ерләгәндәр. Мәйетте ҡәбергә ултырған килеш ерләгән осраҡтар ҙа булған.**



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Беренсе бүлек. Таш быуаты.



### Неолит осоро

Археология фәнендә керамика, ҡиммәтле мәғлүмәти материал булараҡ, тағы ла бер мөһим үҙенсәлеккә эйә. Ер шарындағы барса археологик ҡомартҡылар материалдары күрһәткәнсә, балсыҡ һауыт-һабаны бар ерҙә лә яһағандар, әммә һәр бер территориаль төркөм (союз) ҡәбиләләренең үҙҙәренә генә хас һауыт формалары, балсыҡ составы һәм орнаментацияһы булған. Ошондай техник алымдар, үҫешә барып, быуаттар һәм хатта мең йыллыҡтар дауамында үҙҙәренең үҙенсәлектәрен һаҡлап ҡалған. Яңы территорияларға күсеп киткән ҡәбиләләр һауыт-һабаны әлекке стандарттарға ярашлы яһауын дауам иткән. Әммә археология ошондай ҡатмарлы тарихи факттарҙы бик аныҡ билдәләй ала. Мәҫәлән, бер төркөм ҡәбиләләр тарафынан үҙләштерелгән территорияға икенсе төркөм ҡәбиләләре үтеп инә, һәм улар үҙҙәренә хас булған һауыт-һаба формаларын, орнамент һәм башҡа мәҙәниәт элементтарын алып килә. Оҙаҡ йылдар дауамында бергә йәшәү һөҙөмтәһендә элекке һауыт-һаба формалары аҡрынлап юғала башлай һәм ҡатнаш типтағылары барлыҡҡа килә. Археологтар, керамиканың ошондай үҙенсәлектәре арҡаһында, спорт төркөмдәренә хас булғанса, кешеләрҙең теге йәки был ҡәбиләләр төркөмдәренә (археологик мәҙәниәттәргә) ҡарауын билдәләй ала.

Неолит осоронда таш эшкәртеү техникаһы сәскә ата: кеше ташты тишергә, бысырға, шымартырға өйрәнә, ретушь техникаһы (нуклеус ташын нескә рәүештә эшкәртеү) яҡшыра бара. Таш эшкәртеүҙәге прогресс хаҡында бик күп һанда табылған уҡ башаҡтары, дротиктар, балталар, бысаҡтар һәм башҡа әйберҙәр аша белергә була.



*Дүртенсе һүрәт. Көньяҡ Уралдың неолит осоро торалары материалдары. 1. - кеше һыны башының ярсығы; 2,3 - тәғәйенләнеше билдәле булмаған, шымартылған таш әйберҙәр ("үтек" тип аталған предметтар).*

Дәүләкән районындағы торала тәүләп неолит дәүере кешеһенең ҡәбере табыла. Билдәле археолог-антрополог М.М. Герасимов уның баш һөйәгенән реконструкция эшләгәс, б.э. тиклем V - IV быуаттарҙа Көньяҡ Уралда оҙон буйлы, бер аҙ ғына монголоид һыҙаттары булған европеоид тибындағы кешеләр йәшәүе асыҡлана. Ошондай типтағы кешенең көньяҡ тарафтарындағы илдәрҙә формалашыуы хаҡ тип һанала, шуға күрә уны Алғы Азия тибындағы кеше тип атайҙар. Ошо кеше менән Һабакты III тораһында табылған кешенең балсыҡ портреты (статуэткаһы) бер ни тиклем оҡшаш.

Бындай табыштар ошо дәүерҙә Урта Азияла йәшәүсе ҡәбиләләрҙең характерлы элементы булып тора. Шуға күрә неолит дәүерендә, ер эшкәртеүҙең һәм малсылыҡтың төньяҡ тарафтарына тарала барған сағында, Көньяҡ Урал кешеләренең урындағы мезолит осоро ҡәбиләләре нигеҙендә бында Урта Азиянан һәм Түбәнге Волга буйынан килгән халыҡ төркөмдәренән хасил булыуы хаҡында фараз итергә була.

### Энеолит

Таш быуаттан ҡула (бронза) быуатына күсеү осоронда энеолит тип аталған айырым этап билдәләнә. Был осор б.э. тиклем IV - III быуаттарға ҡарай. Уҙған таш быуатынан ул VI - V мең йыллыҡтарҙа башланған ер эшкәртеү һәм малсылыҡ тармаҡтарының ярайһы уҡ үҫешә барыуы менән принципиаль рәүештә айырылып тора. Баҡыр иретеү металлургияһы барлыҡҡа килә, тикшеренеүселәр фекеренә ярашлы, ул замандарҙа күп кенә тәбәктәрҙә, шул иҫәптән Уралда ла, ер өҫтөнә сығып ятҡан саф баҡыр сығанаҡтары ҡулланыла. Йылға һәм күл буйҙарында оҙайлы ваҡыт дауамында файҙаланылған торлаҡтар күпләп барлыҡҡа килә, улар усаҡтары иҙәндә булған, яртылаш ергә ҡаҙып һалынған өйҙәрҙән тора.



*Бишенсе һүрәт. Энеолит осорондағы балсыҡ һауыт. Өфө-IV тораһы.*

Неолит осоронда хасил булған матди мәҙәниәт элементтары үҫешә бара. Таштан эшләнгән ҡорамалдар төрләнә: төрлө типтағы бысаҡ формаһындағы пластиналар, нуклеустар, бысаҡтар, уҡ башаҡтары, таш балталар һ.б. әйберҙәр ҡулланылышта була. "Үтек" тип аталған, аҫҡы яғы яҫы булып, ярым сфера формаһындағы өҫкө яғының уртаһынан киң паз уйылған таштар киң таралыу таба. Археологтарға бындай предметтарҙың тәғәйенләнеше аныҡ ҡына билдәле түгел: моғайын, улар культ предметы булғандыр, сөнки уларҙың өҫкө яғы ялтырағансы шымартылған.

Йомортҡа йәиһә ярым йомортҡа формаһындағы һауыт-һаба ҡулланыла, әммә төрлө төбәктәр керамикаһындағы теге йәки был биҙәктәр бәйләнеше ағыштан етди айырмалыҡтар бар. Тикшеренеүселәр, башлыса, Урал-Волга буйы территорияһында энеолит осорондағы балсыҡ һауыт-һаба орнаментының үҙенсәлектәрен иғтибарға алып, уларҙы археологик мәҙәниәттәр тип атап, бер төркөм локаль ҡомартҡылар булыуын билдәләй. Улар - Һамар, Хвалынск, Суртандин, Аят, Терһәк, Ботай һәм Ям мәҙәниәттәре.

Әле атап кителгән мәҙәниәттәргә ҡараусылар араһында Ям мәҙәниәте ҡәбиләләре өҫтөнлөклө булып, Волга һәм Көньяҡ Урал араһындағы далаларҙа таралып йәшәгән. Улар көнбайышта, Азов диңгеҙе буйында көн иткән ҡәрҙәш ҡәбиләләр союзының әлеге территорияларағы көнсығыш төркөмөн хасил итә.

Көнсығыш Европаның көньяҡ тарафтарының боронғо тарихында Ям мәҙәниәте ҡәбиләләре айырым урын биләй: улар, тәүгеләрҙән булып, үҫешкән күсмә малсылыҡ аша ошо тәбәктең дала киңлектәрен үҙләштереүсе ҡәүем булараҡ билдәле. Быға дәлил итеп дала төпкөлдәрендә, йылға һәм күлдәрҙән байтаҡ алыҫ ятҡан ерҙәрҙә, яңы типтағы археологик ҡомартҡылар - ҡорғандар хасил булыуын атарға була. Улар боронғо халыҡтар ҡәберлектәренең бер төрө булып, үлгән кеше ҡәберҙәренең өҫтөндәге ер йәиһә таш өйөмдәренән ғибәрәт.

Шул уҡ ваҡытта дала йылғалары һәм күлдәре ярҙарындағы тораларҙың күпселегенең юҡҡа сығыу факттары күҙәтелә, ә был кешеләрҙең күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнә башлауҙарына бәйле. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр бындай үҙгәрештәрҙе ҡоролоҡ осоронда йылға һәм күлдәрҙәге һыу кимәленең ныҡ түбәнәйеп, дала сиктәренең төньяҡҡа табан күсә барыуы менән бәйләп аңлата.

Урал-Волга буйы территорияһындағы иң боронғо ҡорған ҡәберлектәре Ям (соҡор) исеме аҫтында айырым археологик мәҙәниәтте хасил итә. Уларҙа үлгәндәрҙе киң һәм тәрән соҡорҙарға, ҡағиҙә булараҡ, бөгөлгән рәүештә, уң ҡабырғаһында, башы менән көнсығышҡа йәиһә төньяҡ-көнсығышҡа ҡаратып ерләгәндәр. Мәйетте ҡәбергә ултырған килеш ерләгән осраҡтар ҙа булған. Ҡәбер эсенә бүрәнәләрҙән ҙур булмаған буралар төҙәлгән булыуы мөмкин; ҡәбер өҫкө яҡтан ул замандағы ер кимәлендә бүрәнәләр, ярҡалар менән ҡапланған була, уларҙың өҫтөнә бейек ер өйөмдәре яһала. Үлгән кешеләрҙең мәйеттәре ҡуйы охра менән бояла. Боронғо халыҡтар аңында охра буяуы утты, ҡояшты кәүҙәләндерә, улар таҙартҡыс булараҡ күҙаллана. Әйтергә кәрәк, үлгәндәрҙе охра менән буяған Ям мәҙәниәте кешеләре ошолай итеп уларҙың йәндәрен таҙартабыҙ, тип уйлағандарҙыр. Ям мәҙәниәте ҡорғандарында йыш ҡына бары тик кешенең баш һөйәктәрен генә күмеү осраҡтарын иғтибарға алырға кәрәк. Тимәк, боронғо дәүерҙәрҙә барса урындарҙа киң таралған баш һөйәге культы был мәҙәниәт кешеләренә лә хас булған.

Ҡәбергә мәйет янына баҡыр бысаҡтар, балталар, беҙҙәр, балсыҡ һауыттар һалынған; ҡайһы берҙә тишекле таш балталар, арбаларҙың ағас тәгәрмәстәре осрай. Һуңғы табыш, һис шикһеҙ, тәгәрмәсле арбаның бик мөһим транспорт сараһы сифатында ҡулланыла башлауын аңлата.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

Бекназаров Джума - төркмән егете. 60-сы гв. кавполкының 4-се эскадроны сабельнигы. Клочково ауылын азат иткәндә, шыуышып барып, дошмандың станковый пулеметы расчетын, граната ташлап, юҡ итә. I дәрәжәләге Ватан һуғышы орденына лайыҡ була.

Рахманғолов Хәйернас - 60-сы гв. кавполкының пулемет расчеты командиры, Башҡортостандың Күгәрсен районынан. Березна ауылы янында шоссе буйлап сигенеп барыусы дошман рәттәрен пулемет утына тота, бер ротаға яҡын немец һалдаттарын, ергә һырыҡтырып, дарманһыҙ ҡалдыра.

Дилмәнов Ташман - 60-сы гв. полкы пулеметсыһы, Үзбәкстандың Сәмәрҡәнд өлкәһенән. 20 сентябрҙә Лопатино ауылы өсөн алышта дошмандың пулемет нөктәһен баҫтыра, ауыл урамдарында барған алышта, яраланыуына ҡарамаҫтан, пулемет уты менән бер взводҡа яҡын немец һалдаттарын сафтан сығара.

Дилмөхәмәтов Йәнғәли - ошо уҡ полктың 2-се эскадронының пулемет расчеты командиры, Көйөргәҙе районының Яҡуп ауылында тыуып үҫкән. Бегач ауылы өсөн алышта бер взводҡа яҡын немец һалдаттарын пулемет уты менән тарҡата һәм юҡ итә.

Гв. өлкән лейтенанты Сәйетмөхәмәт Фәйзуллиндың (Саҡмағош районы, Иҫке Ихсан ауылынан) Березна һәм Бегач ауылдары өсөн алыштарҙа күрһәткән батырлығы I дәрәжәләге Ватан һуғышы ордены менән баһалана, ул элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнгән була.

Мөхәмәтгәрәй Кәримов (Саҡмағош районы, Рапат ауылынан), гв. кесе лейтенанты, 58-се кавполктың 4-се эскадронында взвод командиры була. Бабы ауылына уның взводы беренселәрҙән булып бәреп инә, өйҙәргә ҡасып, ҡаршылыҡ күрһәтеп маташҡан венгр һалдаттарын бирелергә мәжбүр итә. Мена станцияһын алғанда граната менән дошман пулеметы расчетын юҡ итә. Снов йылғаһының көнбайыш ярындағы алышта уның взводы немец һалдаттарын ҡасырға мәжбүр итә, полкҡа ҡаршы ярға юғалтыуһыҙ сығыу мөмкинлеге бирә. Кесе командир II дәрәжәләге Ватан һуғышы орденына лайыҡ була.

Нигмәт Сәйетборханов (Туймазы районы, Аҙнағол ауылынан), гв. өлкән лейтенанты, 62-се гв. кавполктың 2-се эскадроны командиры. Волкошанка ауылындағы бәрелештә уның эскадроны 3 станковый пулемет расчетын, 36 немец һалдатын һәм офицерын юҡ итә.

Миңлеғәли Тимерханов (Мишкә районы, Башбайбаҡ ауылынан), гв. кесе лейтенанты, 62-се кавполктың 3-сө ҡылыс эскадронының взвод командиры, Клен ауылын азат иткәндә үҙенең взводы менән дошмандың 3 пулеметын, уларҙың расчеттарын, 20-гә яҡын һалдатын юҡ итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Йәйләү тормошо, ҡымыҙ әҙерләү, оҫталыҡ дәрестәре, ат тураһында легенда-йырҙар беҙҙең өсөн ғәҙәти кеүек ҡабул ителә, әммә улар башҡаларға ҙур ҡыҙыҡһыныу уята, улар өсөн был мауыҡтырғыс, хатта мөғжизә кеүек.*



ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# ТАҒЫ ЛА БАШҠОРТ АТЫ ТУРАҺЫНДА

(Башы 1-се биттә).

**Әйҙәгеҙ, ошо тармаҡтарҙың һәр ҡайһыһын айырым ҡарап үтәйек...**

- Мәҫәлән, спорт темаһын ҡарағанда, ат менән бәйле милли спорт уйындары бихисап, әммә уларҙың тәғәйен генә үҫеш программаһы юҡ, йәғни беҙ ат спортын тик бәйге дисциплиналары сиктәрендә генә күрергә күнеккәнбеҙ. Был йәһәттән Баймаҡ ерлегендә 4-5 ат спорты мәктәбен булдырыу урынлы булыр ине. Ул бер үк ваҡытта ипподром, һыбай уҡ атыу полигонын да ҙур эсенә алыр, этник спорт үҙәге булараҡ та хеҙмәт итер ине.

"Башҡорт аты" фестивале беҙгә улаҡ, ауҙарыш, һыбай уҡ атыу кеүек мауыҡтырғыс спорт төрҙәре булыуын күрһәтте. Ҡасандыр беҙҙә хатта "Джигитовка" ла булған бит. Хатта ул Башҡортостан циркы программаһына ла индерелә. Әле был дисциплина тергеҙелә башланы, шуға күрә уның айырым үҙәген булдырыу ҙа бик мөһим. Ғөмүмән, ул үҙәк хеҙмәтенә Рәсәй кимәлендә лә ихтыяж ҙур булыр ине. Был төрҙө үҙләштергән спортсылар һәр бер күләмле сараның биҙәге буласаҡ. Иң мөһиме - юғары һөҙөмтәләргә өлгәшәбеҙ тиһәк, һанап кителгән спорт төрҙәре менән профессиональ рәүештә шөғөлләнергә кәрәк, ә ниндәйҙер сара алдынан үҙаллы ғына түгел, юғиһә, һөҙөмтә булмаясаҡ. Бының өсөн район хакимиәттәренең спорт комитетында этник спорт төрҙәре бүлеген булдырып, махсус белгестәр тупларға кәрәк. Был иһә үҙ сиратында тағы бер проблеманы хәл итеүҙе талап итә: тренерҙар әҙерләү өсөн уларҙы уҡытыу үҙәктәре булырға тейеш. Ғөмүмән, Башҡортостан Республикаһы Спорт министрлығында этник спорт бүлеген булдырып, федерациялар төҙөп, планлы рәүештә эшләү ваҡыты етте.

**Кино төшөрөүсе режиссерҙар, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтов гелән республикала йылҡының күп булыуы, әммә эйәр һалып һыбай йөрөрлөк аттар юҡлығы тураһында белдерәләр. Был кино төшөрөүселәр, тарихи ваҡиғаларҙы реконструкциялаусылар проблемаһы ғына түгел, хатта ауылдарҙа ла өйрәтелгән аттар юҡ...**

- Дөрөҫө шулай: йылҡы күп, эйәр һалырлыҡ ат юҡ. Был бөгөн күп һөйләнгән эске туризмды үҫтереүҙә лә проблема булып тора, сөнки һыбай маршруттарға һорау бар, әммә уларҙың һаны аҙ булыу сәбәпле, хаҡтар юғары. Шуға ул туристарҙы өркөтә. Ә Баймаҡта һәр бер йылҡысылыҡ үҙәге аттарҙы менгегә өйрәтһә, районды Рәсәй кимәлендә ат туризмы үҙәгенә әүерелдерергә мөмкин булыр ине. Бының өсөн районда һыбай барып ҡарарлыҡ маршруттар төҙөргә, уларҙы билдәләргә, маркировкаларға кәрәк. Ирәндек һырты, тарихи ерҙәр буйлап бер нисә көнлөк турҙар асырға мөмкин, фантазияһы эшкә еккәндә, әллә нимәләр уйлап табырға була. Йәйләү тормошо, ҡымыҙ әҙерләү, оҫталыҡ дәрестәре, ат тураһында легенда-йырҙар беҙҙең өсөн ғәҙәти кеүек ҡабул ителә, шуға иҫебеҙҙә китмәй, әммә улар башҡорттан тыш башҡаларҙа ла ҙур ҡыҙыҡһыныу уята, улар өсөн был мауыҡтырғыс, хатта мөғжизә кеүек. Ошо матурлыҡҡа һоҡланып, фото төшөр, видео яҙҙырып




өсөн генә меңәрләгән турист килер ине.

Был идеяны тормошҡа ашырыу өсөн өйрәтелгән, эйәр һалынған, төркөмдә бер-береһенә эйәреп йөрөрлөк аттар булыуы мөһим. Ат өйрәтеүгә субсидия йәки дәүләт заданиеһы биреү - мәсьәләне хәл итеүҙең бер юлы. 20-22 кешене маршрутта йөрөтөү өсөн бер нисә ат үҙәге булдырыу зарур. Аттар әҙер булыу менән ошо үҙенсәлекте күргәҙмәләрҙә, Рәсәй кимәлендә махсус рекламалау эшен башларға кәрәк. Йылҡы тотоусылар был йүнәлештең килемен тойоп, файҙаһын белеп ҡалһа, ул Бөрйәндә Ағиҙел йылғаһынан ағыусылар маршруты һымаҡ йылдам үҫешәсәк. Бының өсөн Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса дәүләт комитеты атлы туризмды үҫтерергә теләгән эшҡыуарҙарға ат өйрәтергә эйәр, йүгән, башҡа кәрәк-яраҡтар алыр өсөн маҡсатлы субсидия булдырырға бурыслы. Әлбиттә, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙарға был йүнәлеш мәшәҡәтле буласаҡ, шулай ҙа бөгөн һыбайлы туризм йүнәлешенә ихтыяж бар һәм ҙур. Мәҫәлән, Рәсәйҙә һыбайлылар ҡатнашлығында күләмле фильмдар төшөрөү өсөн бер юлы мең эйәрле ат ҡуйырлыҡ мөмкинлек юҡ. Быға саҡлы Мәскәү эргәһендә, белеүемсә, Кантимиров дивизияһына ҡараған бер һыбайлы полк булған, фильм төшөрөү өсөн улар йәлеп ителгән. Йәғни аттарҙы менгегә өйрәтеү бик килемле йүнәлеш, һәм әлеге көндә был иҡдисади сегмент буш.

**Иҡтисади сегмент, тигәндән, һыбай йөрөү, ат егеү кәрәк-яраҡтары етештереүселәр ҙә юҡ бит. Хатта арба тәгәрмәстәрен боронгоса ағастан эшләүсе оҫта табыуы ла проблема икән. Тимәк, атҡа бәйле боронғо кәсепселек сегменты ла буш...**

- Бөгөн Рәсәйҙә йүгән, эйәр кеүек әйберҙәрҙе Ставрополь крайында һәм Ростов өлкәһендә етештерәләр. Ситтән килтерелгән тауарҙар, әлбиттә, арзан булмай, уларҙы үҙебеҙҙә эшләй башлау кәрәк. Шуға ла халыҡ кәсептәре үҙәге аша беҙгә күн-тире, ҡайыш һ.б. оҫталарын йыйырға кәрәк. Уларҙы уҡытып, өйрәтеп, урындарҙа етештереү үҙәктәре булдырыу мөһим. Ул үҙәк эске һәм тышҡы баҙар өсөн эшләрлек булһын. Эске баҙарҙа ул ат спорты, туризмы өсөн кәрәк-яраҡтар, шулай уҡ арба, сана һәм башҡа әйберҙәр етештерһә, тышҡы баҙар өсөн сувенирҙар яһай ала. Тире-күн әйберҙәренән эшләнгән сувенирҙар туристар өсөн бик әһәмиәтле. Ғөмүмән, был йүнәлеш тулыһынса БР Туризм һәм эшҡыуарлыҡ министрлығының эше. Күптән түгел халыҡ кәсепселәре үҙәге һәм халыҡ һөнәрселек ижады йүнәлешен үҫтереү ошо ведомство ҡарамағына тапшырылды. Планлы эш алып барғанда, ауылдарҙа был йүнәлеш менән мауығып шөғөлләнеп киткән әүҙем кешеләр табылыр, ул мәшғүллекте арттырырлыҡ йүнәлеш булыр ине.

**Әле атты тик иҡтисади күҙлектән генә ҡараныҡ, ә бит уның сәләмәтлек өсөн дә әһәмиәте бик ҙур. Мәҫәлән, ДЦП йәки терәк-хәрәкәт аппараты зыян күргән кешеләрҙе атта һыбай йөрөтөп дауалау бөгөн медицинала киң ҡулланыла. Ә инде ҡымыҙ менән дауалау тураһында әйтеп тораһы ла түгел, хатта заманында бөйөк рус яҙыусылары Башҡортостанға килеп дауаланыуы хаҡында хәбәрҙарбыҙ...**

- Миңә ситтән килгән бер турист: "Башҡорттар һеҙ атты шул тиклем яратаһығыҙ, хатта уны ашайһығыҙ",- тигәйне. Улар өсөн яратҡан хайуанды ризыҡ итеп ҡулланыу - сәйер, әммә йылҡы итенең, ҡаҙылының организм өсөн файҙаһы ҙур, улар беҙҙең иң яратҡан деликатес. Оҙаҡ һаҡлана торған аҙыҡ төрөнә инәләр, ситтән килгән туристар ҙа бик ярата. Тағы ла тармаҡты үҫтереү өсөн бер мөһим нескәлек бар: йылҡы итен мәктәп ашханалары рационына индереү. Ул йылҡы итенә ихтыяжды үҫтерер, балалар файҙалы ризыҡ менән туҡланыр ине. Был оҙайлы ҡатмарлы эш, әммә уны закондар ҡабул итеп тормошҡа ашырырға мөмкин.

Ә инде ҡымыҙ тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Урыҫ әҙәбиәте классиктары үткән быуатта уҡ ҡымыҙға реклама яһаған, ә беҙгә уны ҡулланып, табыш алырға ваҡыт. Әле ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнәм тигән кешегә, күп булмаһа ла, Ауыл хужалығы министрлығы тарафынан субсидия бирелә. "Башҡорт аты" фестивале сиктәрендә лә ҡымыҙ бешеү оҫталарының конкурсы үтте. Шул уҡ ваҡытта Ауыл хужалығы министрлығы "ҡымыҙ" һәм "ҡымыҙ һымаҡ эсемлек" тигән ике төшөнсәне айырһын ине, сөнки бөгөн ҡымыҙ тип кәзә, һыйыр һөтө продукцияһын да ҡулланабыҙ. Ҡымыҙ - ҡымыҙ булып ҡалырға, ә башҡалары инде ҡымыҙға оҡшаған эсемлек булырға тейеш. Шуға, бөгөн ҡымыҙ стандарттарын тикшереп торған сертификациялау үҙәге лә кәрәк. Башҡорт ҡымыҙы, айырым бренд булып, закон тарафынан яҡлауға мохтаж. Талҡаҫ шифаханаһы янырып, йыһазландырылып, Бөтә Рәсәй ҡымыҙ дауаханаһына әүерелергә тейеш, сөнки унда ҡымыҙ тауар булараҡ күп, йәй буйы тупларға, киптерергә, йыйырға мөмкин. Уның өсөн махсус йыһаздар ҡуйыу мөһим. Әлеге ваҡытта Йоматау шифаханаһы был эш менән шөғөлләнә, әммә уларҙа сеймал аҙ. Ә Баймаҡтан ташырға махсус ҡулайламалы машиналар юҡ. Дим йылғаһы буйында йылҡы һаны кәмеүгә бара, көтөү ерҙәре ҡыҫыла, автомобиль, поезд юлдары селтәре ҙур булыу сәбәпле, йылҡыны үҙ иркенә көтөүгә ебәреү мөмкинлеге юҡ, был яҡта күпләп йылҡы тотоу ҡиммәткә төшә. Ә Баймаҡта, күк Ирәндек буйында, Аллаға шөкөр, йыл әйләнәһенә тибендә көтөүҙә йөрөрлөк урындар бар. Ҡымыҙ менән дауалау әле тажәхмәт пандемияһы осоронда бик актуаль. Дәүләт шифаханаларға халыҡтан күпләп ҡымыҙ һатып алыуҙы яйға һалһа, был тармаҡ үҙенән-үҙе үҫәсәк.

**Һеҙ мәсьәләгә төрлө яҡтан ҡарап, уның перспективаларын, уны нисек рекламалауҙы күҙаллайһығыҙ. Бында, моғайын, оҙаҡ йылдар продюсер булып эшләүегеҙ ҙә ярҙам итәләр. "Башҡорт аты" фестивале, моғайын, бер тапҡыр ғына үткәрелгән сара булып ҡалмаҫ, киләсәктә уның масштабын нисек итеп күрәһегеҙ?**

- Фестивалде алдан уҡ рекламалағанда, ул туристар йәлеп иткән "ваҡиғалар туризмы сараһы" булып китә ала. Шул уҡ ваҡытта Баймаҡ ерлеге - әҙер геопарк, ул геопарктарҙың фәлсәфәһенә тура килеп кенә тора, сөнки геопаркта төбәктең тәбиғи, географик, мәҙәни үҙенсәлектәре урындағы халыҡтың иҡдисади, социаль, мәҙәни үҫешенә ярҙам итергә тейеш һәм бында Рәсәй кимәлендәге геопарк булдырырлыҡ бөтә шарттар ҙа бар. Мәҫәлән, тәбиғи-географик шарттарға килгәндә, Урал йылғаһының бейек ярында Кардаил геологик киҫелеше бар, ул геологтар тарафынан "Янғантау" геопаркына ингән Мәсетле "алтын ҡаҙығынан"да алдараҡ өйрәнелә башлаған; Ирәндек һырты, радон сығанаҡлы махсус тәбиғи статуслы Талҡаҫ күле, Туғажман тауындағы таштарҙа кеше һындары һүрәттәре, Ғәҙелша шарлауығы, Төлкөләтау һәм башҡа бик матур эстетик зауыҡлы тәбиғәт мөғжизәләре бар бында.

Тарихи-мәҙәни шарттарға милли үҙенсәлеге, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлаған бай тарихлы башҡорт ауылдарында йәшәгән талантлы халҡын, "Ирәндек" тарихи-археологик ландшафт музей-ҡурсаулығын, "Темәс" башҡорт милли мәҙәни үҙәген, "Башҡорт аты" фестивален, Урман һабантуйын, этник спорт уйындарын индерергә мөмкин.

Иҡдисади шарттар: традицион халыҡ мәшғүллеге, йылҡысылыҡ һәм ҡымыҙсылыҡ; эске туризм; туристик рекреацион зоналар, "Талҡаҫ" шифаханаһы, ҡунаҡханалар, ҡымыҙ бешеү йәйләүҙәре.

Бөгөн районда "Ирәндек" музей-ҡурсаулығы бар, Талҡаҫ күле тәбиғәт һәйкәле статусына эйә, Темәс ауылы үҙәгендә тарихи биналар берләштерелеп, күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекты статусын алды. Улар барыһы ла норматив закон һәм акттар менән нығытылған (хоҡуҡи шарттар).

Әле республикала ике геопарк даими эшләп килә. Уларҙан методик ярҙам алып, тәжрибәләрен өйрәнеп һәм кадрҙар үҫтереп, "Талҡаҫ" шифаханаһы базаһында дирекция булдырып, был проектты бойомға ашырырға булыр ине. Баймаҡ районында "Ирәндек" геопаркын төҙөп, беҙ, донъя тәжрибәһенә таянып, башҡорт халҡының милли үҙенсәлеген, уның атын, ҡурайын, ҡымыҙын тарихын, йырҙарын һаҡлау механизмын булдырыр инек, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фестивалдең ғилми өлөшөндә Республика Башлығы Радий Хәбиров башҡорт атын өйрәнеү буйынса махсус институт булдырыу бурысын йөкмәтте. Был хаҡта фекерен түбәндәгесә еткерҙе Заһир Зәки улы: "Ысынлап та, башҡорт аты һаҡлауға, үҫтереүгә һәм юридик яҡлауға мохтаж. Был мәсьәләләр менән киләсәктә асыласаҡ махсус фәнни-тикшеренеү институты шөғөлләнергә тейеш. Башҡорт атын тарих, медицина, социаль-иҡтисад, туризм һәм башҡа бик күп аспекттарҙан ҡарап өйрәнергә бурыслыбыҙ. Бер үк ваҡытта "Башҡорт аты музейы"н булдырыу ҙа кәрәк һәм был да өлгөрөп еткән мәсьәлә".**

✓ *Тәғәйенләнгән призывниктарыбыҙҙы гарнизонға алып килеү менән уларҙы часть командирҙары кемуҙарҙан бүлешеп ала торғайны. Сөнки егеттәребеҙ һәр ҡайҙа ла үҙҙәрен тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтәләр.*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Гәзитебеҙҙең һуңғыраҡ һандарының береһендә Һөйөндөк Аҫыловтың "Баш ҡала кешеһеме? Ул киң күңелле, алсаҡ, текә һәм... битараф" тип аталған бик ҡыҙыҡлы мәҡәләһе сыҡҡайны. Тәү ҡарауҙа башҡаларҙан бер нимәһе менән дә айырылмаған Өфө кешеһенә хас булған үҙенсәлектәрен һөҙөп алып, уҡыусының иғтибарын шуға йүнәлтә автор. "Өфө кешеһе" тигәндәй, илебеҙҙә киң таралған тағы бер һүҙбәйләнеш хаҡында һөйләшеп алмаҡсы булдым. Йәғни, урыҫтағы "русское поле", "русская береза", "русский лес", "русская баня", "русская водка" тигән кеүек үк, хәҙер инде күптәр йыш ҡына телгә алған "башҡорт ҡымыҙы", "башҡорт ҡорото", "башҡорт балы", "башҡорт ҡыҙы", "башҡорт аты", "башҡорт ҡурайы", "башҡорт тирмәһе" һымаҡ һүҙҙәрҙең береһе хаҡында.**

# БАШҠОРТ МАЛАЙЫН...

## һәр ҡайҙа ла таныйҙар

### Башҡа халыҡтар ҙа белә...

Башҡа милләт кешеләре араһында йөрөгәндә башҡортлоғоң айырыуса нығыраҡ тойола бит инде. Медицина институтының беренсе курсын тамамлап, студент төҙөлөш отряды составында Ҡалтасы районының бер ауылында малсылыҡ комлексы төҙөүҙә ҡатнашырға тура килгәйне. Яҡын-тирәләге ауылдарҙа башлыса мариҙар йәшәй. Ана шунда бер фронтовик бабай (уға 51-52 йәштәр тирәһе булғандыр) менән дуҫлашып алдым. Үҙе башҡорт телен "һыу кеүек эскән" был оло кеше мине "башҡорт малайы" тип атай ине. Күңелгә ятып торған ана шул атама тураһында бер аҙ фекер йөрөтөп алырға ниәтем. Ферма ҡарауылсыһы булып эшләгән әлеге ағай "Башҡорттарҙы мин ныҡ уважайт итәм", ти торғайны. Ҡыйыу башҡорт егеттәре менән бергә һуғышта ҡатнашыуын һәр саҡ иҫкә алғаны хәтеремдә. Арыҫлан Мөбәрәков төп ролдә уйнаған "Салауат Юлаев" фильмын да яратып ҡарағаны, милли батырыбыҙҙың "Һаумыһығыҙ, башҡорттарым!" тип сәләм биреп килеп ингән эпизоды хисләнеп, хатта ҡулдарын йәйә биреп ҡабатлағаны һаман күҙ алдымда. Ҡайны берҙә дәртләнеп китеп башҡорт йырҙарын да матур итеп йырлап ала торғайны был мари ағай. Беҙҙең милләт кешеһенән тик йөҙө менән генә айырыла һымаҡ ине ул.

Беҙ, студенттар, кистәрен Киебаҡ ауылы клубына киноға йөрөнөк. Фильм тамамланғас, нәҡ тә беҙҙең яҡтарҙағы һымаҡ уҡ, йәштәр уйынға ҡала. Уларҙың уйындарына мин дә ҡыҙыҡып киттем. Гармунға эйәреп, көйҙәре бер аҙ башҡортсаға тартым булған йырҙар йырлап, егет-ҡыҙҙар сылбырға теҙелешеп, иҙән буйлап йөрөй. Көйҙөң икенсе яртыһы еткәс, барыһы ла тыпырлатып, бейешеп ала. Тик тыпырлатыуҙары беҙҙекенән башҡараҡ. Ә һөйләшеүҙәре бөтөнләйгә башҡорттоконa оҡшамаған уларҙың, әммә йыр көйҙәре күңелгә ятып тора. Бер-ике көн аралашҡас, мари көйҙәрен отоп та алдым... Һәр кемдең дә йәш, шуҡ мәле була бит инде. Минең дә (19 йәш) шундай саҡтар ине. Гармунсы малайҙың "хромкаһын" һорап алдым да, нәҡ үҙе һымаҡ итеп, мариса һыҙҙыра башланым. Минең уйнауым да уларға оҡшап ҡалды, буғай, дәррәү бейергә төшеп киттеләр. "Һеҙҙең йырығыҙҙы башҡортса йырлайым әле", тинем тегеләргә һәм бер таҡмаҡты мари көйөнә һалып, йырлап та ебәрҙем. Тик, шаянлығыма һалышып, йырҙың башҡортса һүҙҙәрен кирегә әйләндерҙем (барыбер улар башҡортса белмәй, йәнәһе): "Уана нәглик ағанишам рәднәгәйет нүк кети. Едненәгйәһ медлеб едни, пейәһ атя лүк пети..." Көйө үҙҙәренсә булғас, бейеҙәр тегеләр. Һүҙҙәре аңлашылмаһа ла, ритм һәм рифмалары тап килеп кенә торған был йыр ишаратының ысынында "Анау килгән машинаға тейәгәндәр күн итек..." тип башланған шаян таҡмаҡ икәнен белмәйҙәр. Шулай ҙа уның әллә ни башҡортса түгеллеген дә һиҙенәләр, буғай. Ҡыҙҙар пырхылдашып көлөшә...

Бер нисә көндән, тегеләргә артыҡ ныҡ "өйрәнеп", әрһеҙләшеп киттем, ахырыһы, тағы бер таҡмаҡты һалдыра башланым (барыбер башҡортса аңламайҙар, тим инде). "Юҡ башҡортто ҡайҙан алаң, мари булһа ла ярай. Һөйһә - һөйөр, һөймәһә - юҡ, барыбер яттарға ҡарай..." Тартай теленән табыр, тигәндәй, бәгзеләргә был йыр оҡшаманы, ахыры, клубтан сығыуыма, бер нисә егет мине тышта көтөп торған. Күмәкләшеп, "башҡорт малайы" менән "серьезно" һөйләшеп алдылар (күҙ төбөндәге "күк" ике аҙна тирәһенә етте). Күптәренең башҡорт телен аңлауын һуңынан ғына белдем, ауыҙыңа май туңғыры! Гәйеп үҙемдә булғанғамылыр, был егеттәргә ҡарата һис кенә лә үс тойғолары һаҡланып ҡалманы. Әйткәндәй, үҙе башҡорт булып та, туған телен бөтөнләйгә белмәгән милләттәштәребеҙгә ана шул мариҙарҙы фәһем итеп ҡуйырға ла булалыр...



### Мин - милләтсе?

Хәрби табип булып хеҙмәт иткән дәүерҙә госпиталдә анестезиолог вазифаһын атҡарған Сергей Ефремов исемле бер подполковниктың да башҡорттарға айырыуса йылы ҡарашы хәтерҙә ҡалған. Башҡортостандың Әбйәлил районынан булған бер егет менән ҡасандыр Силәбе медицина институтында бергә уҡыған икән ул. Ана шул һабаҡташ дуҫы хаҡында, унан өйрәнеп алған бер нисә башҡорт һүҙен белеүе тураһында һөйләгәйне. Ауыл еренән булған яҡташыбыҙ уны башҡорт ҡороты менән һыйлаған һәм беҙҙең милли ашамлығыбыҙ уға бик оҡшаған икән. Шуны һаман онота алмай. Минең менән танышҡас та Сергей шунда уҡ: "Башҡорт малай?"- тип һораны. Сираттағы ялға ҡайтҡанымда киптерелгән ҡоротҡа заказ биреп ебәрә торғайны. Был офицер ярайһы ғына шаян, юморға бай булып сыҡты. Үҙемдең ЛОР бүлегенә берәй башҡорт һалдатын дауаларға һалыуым була, мине "милләтселектә гәйепләп", тәрттөрөргә тотона: "К тебе опять башкорт малай поступил? Как всегда, только про своих заботишься..." Бер Русских тигән фамилиялы урыҫ һалдатына ниндәйҙер операция яһарға тура килгәйне. Унһың һауығып, госпиталдән сығыр ваҡыты еткәс, сираттағы иртәнге "пятиминутка-ла" операция шәфҡәт туташына эш ҡушам: "Русских перевяжи, а остальных я сам лично буду смотреть". Шуны ишетеп ҡалған әлеге докторға етә ҡалды: "Слышите, Халил Тухватович - ярый националист, своих башкир только сам лечит, а русских - сестре доверяет".

### Оҡшаттылар

Совет осоро, дивизиябыҙҙа СССР-ҙың нисәнселер юбилейын билдәләгәйнеләр. Һәр бер часть берәй халыҡтың милли йырын йә бейеүен күрһәткән концерт номеры менән сығыш яһарға тейеш. Шундай-бындай нәмәләргә йыш ҡына ҡатнашып йөрөгәнгәмелер, беҙҙең госпиталь исеменән миңә шул эште йөкмәттеләр. Коммунист булараҡ, унан баш тартырға ла тейеш түгел инем. Инфекция бүлегендә эшләгән бер украин милләтенән булған Надя исемле шәфҡәт туташына башҡортса йыр өйрәтеп, икәүләп сәхнәлә йырлағаныбыҙ хәтеремдә. Енелерәк булһын өсөн уға ябай "Бүләк" йырын һайланым. Оҙон ҡулдәк кейергә, сәсен уртаға ярып үрергә ҡуштым. Ҡулдәк өҫтөнән камзулды хәтерләткән жилет та кейеп алғас, ҡара ҡашлы, ҡара сәсле, һылыу йөҙлө был "хахлушка", ысынлап та, башҡорт ҡыҙына оҡшап китте. Концерт алып барыусы: "Перед вами выступает башкирский егет и башкирская красавица... " - тип иғлан итте. "Бүләк итеп сәскәләр өҙмәнем, мин һеҙгә иң матур йыр эҙләнем..." тип башланып киткән был йырҙың "Ләл-ләләләл-ләләләл-ләләләә..." тигән ерен еткәс, концертҡа килгән бөтә халыҡ, шул ритмға тап килтереп, алҡышланы. Залда ултырыусылар араһында ла бер нисә яҡташыбыҙ булған икән. Концерт һуңынан сәхнә артына килеп: "Тыуған яҡты иҫкә төшөрҙөгөҙ. Хатта илағылар килеп китте..." - тип әйтеүселәр булды.

Икенсе бер шундайыраҡ концерт-конкурста ҡурай менән сығыш яһарға йөрьәт иттем. Баштараҡ, сит милләт кешеләре ҡурайҙы бөтөнләйгә аңламаҫ, тип уйлағайным. Дивизия оркестрында баянсы булып хеҙмәт иткән бер урыҫ һалдатына "Сыңрау торна" һәм бер нисә бейеү көйө өйрәттем. Элек студент саҡта концерттарҙа кейгән төлкө кәпәсем, елән, камзулым да килешеп ҡалды. Тик башҡорт итеге генә юҡ ине. "Офицерский" хром итекте аҡ төҫкә буяп, ҡунысына башҡорт биҙәге төшөрөп, үҙемә бынамын тигән милле итек яһап алдым... Ҡурайға баян ҡушылғас, номерыбыҙ ҙа матур ғына килеп сыҡты. Тәүҙә уйнаған халыҡ көйөн залдағы тамашасыларҙың һағышланып тынлап ултырғаны күренә. Ә инде бейеү көйҙәре башланғас, алдағы рәттә ултырыусы бер нисә кешенең түҙмәй бейешеп алып китеүе беҙҙең күңелде күтәреп ебәрҙе. Концерт һуңынан урыҫ милләтле бер офицер ҡурайҙы ҡулына алып, улай-былай әйләндергеләп, хатта эсенә өрөп тә ҡараны. "Сыңрау торна" бигерәк тә күңеленә ятҡан икән. "Бик һағышлы көй. Уны тынлаған мәлдә үҙеңде икеһеҙ-сикһеҙ иркен далала йөрөгән һымаҡ тояһың..." тигән һымағыраҡ итеп үҙенең хистәре менән бүлешкәйне. Унда башҡа бик күп милләт вәкилдәренең береһенән-береһе яҡшыраҡ номерҙары ла булыуына ҡарамаҫтан, жюри быны ошо сығышыбыҙҙы "оригинальное выступление" тип юғары баһалап, беҙгә беренсе урынды биреп ҡуйҙы. Милли кейемемдә лә оҡшаттылар ахыры...

### Гауптвахтанан ҡотолған...

Офицер булып хеҙмәт иткән бер милләттәшебеҙҙең (йәш лейтенанттың) нисек башҡорт ҡурайы арҡаһында гауптвахтанан ҡотолоп ҡалғаны хаҡында ирмәк итеп һөйләгәйне бер хеҙмәттәш. Егетебеҙ гарнизонда үткәрелгән ниндәйҙер бер сараға үҙенең алюмин торбанан яһап алған ҡурайын тотоп барған. Башҡалар менән шул кисәлә байрам итеп, уйнап-көләп, артығыраҡ "төшөрөп" тә алған был яҡташыбыҙ хәрби формала булған. Үҙе йәшәгән дөйөм ятаҡҡа урам буйлап тура ҡайтып китергә ҡыйыныһынып, парк аша ҡайтыуҙы хуп күргән лейтенантыбыҙ. Парктағы күл сите буйлап бара биргәс, шундағы бер эскәмйәгә ял итергә ултырған. Хатта бер аҙ ҡурай уйнап та алған һәм... үҙе лә һиҙмәҫтән, ултырған килеш йоҡлап киткән. Кемдер ененән тартҡанға уянып ҡараһа, алдында бер оло йәштәрҙәге майор баҫып торғанын күргән. Уң беләгендә ҡыҙыл повязкаһы ла бар икән. Арттараҡ ике һалдаты тора. Был етди өлкән офицер ҡулын козырегына ҡуйып, үҙен: "Начальник патруля - майор Фәләнов", - тип таныштан. Патрулде күргәс, егеттә йоҡо ҡайғыһы киткән, әлбиттә. Әле ныҡлап айныңып өлгөрмәгән йәш офицер майор алдында туп-тура баҫырға тырышып: "Лейтенант Тәғәнбаев..." - тип яуап биргән. Баштараҡ был лейтенантты ҡулға алып, комендатураға илтергә көйләнгән әлеге майорҙың күҙҙәре егеттең ҡулындағы ҡурайына төшкән. "Башкорт малай?" тигән һымағыраҡ һорау биргәс, "Так точно!" тип яуаплаған лейтенант. Урыҫ милләтле был өлкән офицер үҙенең дә Башҡортостандан булыуы, ошо башҡорт музыка ҡоралының уға бик таныш булыуы хаҡында ла әйткән. Шул арала күңеле йомшарып, лейтенанттың адресын һорашып алған һәм, башҡа берәй патрулгә эләкмәһен тиепмелер, уны дөйөм ятаҡҡа тиклем оҙатып та ҡуйған...

### Башҡорт балына тиңләрлек...

Сираттағы саҡырылыш мәле яҡынлаша башлаһа, командирҙың мобилизация буйынса ярҙамсыһы миңә: "Готов поехать в Өфө за башкирскими джигитами?" - ти торғайны. Мин үҙем дә Башҡортостан йыйыу пунктына командировкаға йөрөргә ярата инем. Тәғәйенләнгән призывниктарыбыҙҙы гарнизонға алып килеү менән уларҙы часть командирҙары кемуҙарҙан бүлешеп ала торғайны. Сөнки егеттәребеҙ әлеге даны таралған башҡорт балы һымаҡ, һәр ҡайҙа ла үҙҙәрен тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтәләр. Яҡташтарым хаҡында офицерҙәр һәр саҡ "ышанеслы, эшһөйәр егеттәр" тип әйтә ине. Милләттәштәрем тураһында ошондай һүҙҙәрҙе ишетеү минең күңелгә бәлзәм булып ята. Ә иң мөһиме, был - ысынбарлыҡ! Башҡорт малайҙарының бер ҡайҙа ла һынатмағандарын үҙ күҙҙәрем менән күреп, улар менән ғорурланып йөрөй торғайным шул...

Әйткәндәй, баштараҡ әлеге мари бабайы йыш ҡына иҫкә алған Салауат исемен ҡабаттан әйләнеп килеп, шуны әйтер инем. Динебеҙ менән бергә гәрәпсәнән килеп ингән был исем халҡыбыҙҙа ифрат киң таралған. Ҡасандыр Әбей батша тарафынан хатта тыйылған булған был исемде мин әлектән фәҡәт башҡорттоҡо тип кенә һанайым. "Ысын башҡорт булһын!" тигән теләк менән тәүге улыма тап шул исемде бирҙем дә инде. Ишетеү менән шунда уҡ башҡорт батырын күҙ алдына килтерерҙәй был исемде бөтә Евразияла ла белмәгән кеше юҡтыр ул...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

✓ Эш туйға барып еткәндә, хәлде үҙгәртеп буламы ни? Ун етелә, ун һигеҙҙә, егермелә үҙгәртеп булалыр. Инде утыҙ йәшкә еткәндә, бөтәһен дә пыран-заран килтереп, тормошто өр-яңынан башлап буламы ни? Ниңә был көндә көттөң?






* * *

Әле уның туйы башланыр мәлдә генә нишләп ҡайтып төшкән һуң Гәзинур? Эш туйға барып еткәндә, хәлде үҙгәртеп буламы ни? Ун етелә, ун һигеҙҙә, егермелә үҙгәртеп булалыр. Инде утыҙ йәшкә еткәндә, бөтәһен дә пыран-заран килтереп, тормошто өр-яңынан башлап буламы ни? Ниңә был көндә көттөң? Нишләп һин гел һуңлап йөрөйһөң? Һуңлап!

...Ике ай үтте. Бөтмәҫ эшенә тотҡарланып, Гәзинур һаман ҡайтманы. Ул арала Камиланы Үрнәк тулы булмаған урта мәктәбенә директор итеп саҡыра башланылар, һөйгәненән хәбәр көткән ҡыҙ яуапты һаман һуҙҙы. Ниһайәт, Гәзинур шылтыратты. Камиланың күҙенән йәше бәреп сыҡты хатта.

- Гәзинурым!..

Гәзинурҙың һүренке тауышы уны айнытып ебәрҙе. Ҡатыны ҡаты ауырып киткән. Әлеге мәлдә табиптар ҙа асыҡ ҡына бер нәмә әйтә алмай, һаман хәстәхананан сығармайҙар. Камиланың күңеле кителде, һүҙ юҡ, Гәзинурға йәшәгән ҡатыны ҡәҙерле... Ана бит, һуҙа. Был юлы ҡатыны ауырый ҙа, ти. Ләкин сәләмәт сағында ла һуҙҙы бит. Камиланың урыны ҡайҙа? Ул тағы ла көтөргә тейеш. Ҡасанға тиклем? Билдәһеҙ, һин көткән, һин өҙөлөп яратҡан әүәлге Гәзинурмы һуң ул? Әллә үткән ғүмерендәге хыялын терелтергә маташыу ғынамы?

- Камила, зинһар, мине дөрөҫ аңла... Аҙ ғына көт.

- Көтөрмөн, - тине төшөнкө тауыш менән Камила. - Тағы ла көтөрмөн. - Йөрәгенең бер ҡылы өҙөлгәндәй булды. Күҙенә йәш эркелде. Ниндәй көс һуң уларҙы бер-береһенән алыҫлаштыра? Был ниндәй йырып сыға алмаҫлыҡ ҡуласа булды һуң? Сараһыҙҙан Үрнәккә эшкә барырға ризалыҡ бирҙе. 1 августа ул үҙ өҫтөнә өр-яңы бурыс - директорлыҡ вазифаһын йөкләне.

Үрнәк ят ауыл түгел. Бында туғандарына ҡунаҡҡа килә торғайны. Өйрәнелгән эш, башлап китеүе ауыр булманы. Дөрөҫ, ауыл район үҙәгенән алыҫыраҡ, уның ҡарауы, бындағы тәбиғәт - ожмахтың бер мөйөшө.

Камила мәктәп йортона урынлашты. Уҡытыусылар менән танышты. Ныҡлап эшкә егелгәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Баштағы шикләнеү-икеләнеүҙәренән бер нәмә лә ҡалманы. Уҡытыусылар династияһынан булыуы ла ярҙам итмәй ҡалмағандыр.

Заманов фамилиялы физкультура уҡытыусыһы ғына мәктәптә күренмәне. Балаһы ауырый, тинеләр. Бала ауырый тип, эшкә сыҡмай ятҡан ата кешене күргән юҡ ине әле. Бәлки, ҡатыны ла сирләп киткәндер? Ҡатыны, тигәндәй... Күҙ алдына йәнә Гәзинур килеп баҫты. Ауыр уйҙарҙан арынырға теләгән Камила урынынан ҡалҡынды. Үкенес-һағыш күңелдә кимермәһен, һис юғында, физрук ғаиләһен барып күрергә, хәл-әхүәлдәрен белешергә кәрәк. Баҡтиһәң, улар күршеләш кенә икән. Ишекте асыуға, ҡаршыһына биш йәштәрҙәге ҡыҙ бала йүгереп килеп сыҡты.

- Һин минең әсәйемме?

Аптырап ҡалған Камила ни әйтергә белмәй торғанда, ҡыҙыҡай уны ҡосаҡлап та алды. Бер ҡулын төпкө бүлмәгә һуҙҙы.

- Атай, әсәйем ҡайтты!

Ишектән йүгерә-атлай бер ир килеп сыҡты. Яңы директорҙы танығандыр, ҡаушауы йөҙөндә ап-асыҡ сағылды.

- Гәфү итегеҙ...

Ҡыҙыҡай Камилаға ныҡыраҡ һыйынды.

- Әсәй!

Мәктәп директорына баланы ҡосаҡлауҙан башҡа сара ҡалманы. Үҙе аптыраған ҡарашын йорт хужаһына төбәне. Тегеһе иһә йәнһәтләп ҡыҙына үкталды.

- Зөлфирә, ул әсәйең түгел.

Камила баланы күтәреп алды.

- Йә, Зөлфирә, әйт әле, һиңә нисә йәш?

- Дүрт.

- Тағы ла аҙ генә ҙурайһаң, әсәйең ҡайтыр. Көтәһеңме?

уның янына ашыҡмайһың? Ҡайҙа элекке ихтыяр көсөң? Был хәл Камиланы утҡа һалды. Күңеле тартмаған кеше менән яфа сиккәнсе, яратҡанына ынтылырға тейеш түгелме ни һуң ул? Нишләп һаман һуҙа? Нимәне хәл итә алмай? Бөтәһе тураһында аңлаштылар бит инде! Әллә улай түгелме? Юҡ икән, асыл, аңлат, Камилаң барыһын да аңлаясаҡ. Ете йыл үтеп китте шул. Хәҙер инде бергә тормош көткән кешеһенә лә өйрәнгәндер. Әҙәм балаһы өйрәнә, күнә бит ул. Тәбиғәте шулай. Бына Камила ла яңғыҙлыҡҡа күнде түгелме ни? Күнде? Гәзинурҙы көтөүе шул яңғыҙлыҡҡа күнеүҙәнме әллә? Бәлки, йәшлек мәхәббәте һыҙлау ғыналыр?..

Камила, күңелһеҙ уйҙарҙан арынырға теләгәндәй, тәҙрәнән

Шул саҡ Исхаҡтың күҙҙәре осҡонланып киткәнен күреп, үҙе лә әҫеле-һыуыҡлы булып китте.

Камиланың кейәүгә сығырға йыйыныуын ишеткәс, әсәһе түгелеп илап ебәрҙе. Хоҙай ҡабул итте, ахырыһы, теләген, инде был ҡыҙы өсөн әрнеүҙәре бөтөр. Изге хәбәр хәйерле эштәр менән тамамлана күрһен. Бына шуға ла ата менән әсә туйҙы ашыҡтырҙы: бер ауыҙ бешһә, һыуыҡ һыуға ла өрәһең... Туйға әҙерлек бик ҡыҙыу барҙы. Әсәһенең самаһыҙ ҡабаландырыуы аптыратты Камиланы. Әйтерһең, аҙ ғына кисектерһәләр, ҡыҙын урлап алып китәләр. Хәйер, Камила туйға ҡаршы ла булғайны, ләкин Исхаҡ шулай тине: "Һине туй күлдәгеңдә күргем килә". Ул алып ҡайтҡан зиннәтле бүләкте

Заманов гәйепле тауыш менән һүҙгә ҡушылды.

- Беҙ әле генә әсәй тураһында һөйләшеп ултырғайныҡ... Мин уға һөйләгәйнем...

- Күрәһең, мин һәйбәт әсәйгә оҡшағанмын, - тип көлдө Камила. - Бар, балаҡай, уйынсыҡтарыңды алып кил. Күрһәт миңә.

Ҡыҙыҡай ялп итеп ҡалды.

- Уның әсәһе... - Камила Замановтың күҙҙәренә ҡараны ла бөтәһен дә аңланы. - Гәфү итегеҙ...

- Ике йыл элек...

- Йә Хоҙа! - Камила йүгереп килеп сыҡҡан Зөлфирәне ҡосаҡлап, башынан һыпырҙы. - Мин һиңә тағы ла килермен, йәме.

- Юҡ, мин дә һинең менән! - Ҡыҙыҡай уға сат йәбеште. Камилаға Зөлфирәне үҙе менән алыуҙан башҡа сара ҡалманы. Бынан һуң ул күршеһе Исхаҡҡа йыш ҡына инеп йөрөр булды. Тәм-том бешерһә, Зөлфирәне саҡырҙы. Үҙенсә ҡыҙыҡайҙы йылылыҡ менән солғарға тырышты. Яңғыҙы ғына бала ҡараған егерме алты йәшлек ирҙе лә йәлләне. Шул уҡ ваҡытта уның оҫта ҡуллы, егәрле булыуына һоҡланды, ҡыҙ балаһын уйлап, тиҙерәк өйләнеү хәстәре күрмәүенә лә ғәжәп итте.

Гәзинурҙан әле ни бары бер генә хат килде. Камила көткән йылы, өмөт тулы һүҙҙәргә ҡарағанда, унда күберәк тормошҡа зарланыу ине. Ҡыйын икән, һине йыуатыр-наҙлар, улай ғына ла түгел, хатта йәнен бирергә әҙер һөйгәнең бар ҙа баһа! Ниңә

тышҡа баҡты. Ана, тышта Зөлфирә уйнай, ырғый-һикерә, йүгерә, тыштың бысраҡ икәнен дә тоймай. И гонаһһыҙ бала саҡ!.. Ваҡытынан элек күңеленә нәжес яҡмаһындар ине... Теге йылда Гәзинур менән өйләнешкән булһалар, уларҙың да балалары ошолай гөр килеп йүгереп йөрөгән булыр ине. Ә бында, эргәлә, әсә наҙын белмәгән бала үҫә. Уның иһә бала һөйгәне юҡ... Камила тағы ла тышҡа төбәлде. Бәй, Зөлфирә соҡор эсендәге батҡаҡҡа йығылып төштө лә баһа! Ана, сығам тип маташҡан һайын, бысрана ғына бирә. Атаһы өй тирәһендә йөрөй ине түгелме, нишләп күҙҡолаҡ булманы? Камила йүгереп барып ҡыҙҙы сығарҙы ла, етәкләп өйҙәренә алып китте. Ҡыҙын күргәс, Исхаҡ ҡаушап төштө.

- Хәҙер йыуындырам, төшөрөгөҙ...

- Мин үҙем, - тине Камила шелтәләгән төҫлө һәм, йыуынғысҡа күнәктән һыу һалып, баланы йыуындырырға кереште. Шул саҡ Исхаҡ өндәшмәй генә уның эргәһенә йылы һыу һалынған тас килтереп ҡуйҙы. Камила уға күҙен тултырып бер ҡарап алды, унан - һыуыҡ һыу һалынған йыуынғысҡа. Ахыр, хәстәрлекле атайға һүҙһеҙ генә йылмайып баш ҡаҡты һәм Зөлфирәне тасҡа баҫтырып, сайындырырға кереште. Бысраҡ кейемдәрен йыуып элгәс, Исхаҡҡа шаяң ҡараш ташлап, һүҙ ҡатты:

- Йә, нисек, минән хужабикә сығамы?

күргәс, әллә нимә эшләп китте. Камиланың бер туй күлдәге һандыҡта ята... Дөрөҫ, теге ҡәһәрле көндән һуң бер ҡасан да һандыҡты асып ҡараған булманы. Ләкин яталыр бит, кем уға оронһон инде?

Иртәгә туй тигән кесе йома көндө уны аяҡтан йығырҙай хәбәр килтерҙеләр: "Гәзинур ҡайтҡан". Төҫө үҙгәреп килеп ингән әсәһенә ҡарап, ул башта күрҡып китте. Шунан һағайҙы.

- Ҡыҙым, һинең генә түгел, һис гәйебе булмаған башҡаларҙың да яҙмышы хәл ителә...

- Гәзинурмы?.. Ҡайҙа ул?..

Ишектән күҙҙәрен ҙур асҡан Гәзинур килеп инде. Йөҙө апаҡ булған Камила уға табан атланы.

- Һин! Гәзинур, һин нисек бында?

Уларҙың нимә һөйләшкәненә ирекһеҙҙән шаһит булған әсә бер аҙ ваҡыттан һуң телгә килергә, уларҙың һүҙен бүлдерергә батырсылыҡ итте.

- Гәзинур, миңә биргән һүҙеңде тот. Ваҡыт! Аҡылыңа кил, бөгөнгө туй артында нисәмә яҙмыш...

- Әсәй, үтенәм, ҡалдыр беҙҙе!..

Ишек ябылды. Камила менән Гәзинур ҡулға-ҡул тотошҡан килеш һүҙһеҙ баҫып торҙолар. Кинәт Камила ҡулын тартып алды.

- Һин ошо көндә көттөңмө?

Нишләп һаман яуап ҡайтармай һуң?

- Ни өсөн һин бында? - Иңрәп сыҡты тауыш.

- Кисектер, - тип бышылданы Гәзинурҙың ирене.

- Кисектерҙе-е-ем... - тине үкенесле тауыш менән Камила. - Гел кисектерҙең, һинең генә ваҡытың табылманы.

- Ошо ҡарашыңдан... Көйҙөргәс ҡарашыңдан... Ул мине бер ҡасан да гәфү итмәҫ кеүек тойолдо. Әле лә ул...

"Был ҡараш һәр саҡ һине яратыр, наҙлар, һоҡланыр өсөн эҙләнә! Әле лә ул һиңә бағып туя алмай һәм мәңге һоҡланып туя алмаҫ. Тик нимә тип ышаныр?.. Юҡ, кәрәкмәй, хәҙер һуң... Хәҡиҡәт шунда - инде һиңә бер ҡасан да былай ҡарай алмам..." Һөйгәненең күҙҙәренә әрнеү һәм һағыш менән төбәлде ул.

- Туйға беҙҙе уҡытҡан уҡытыусылар ҙа киләсәк... Шулай уҡ Үрнәктә минең менән бергә эшләгәндәр ҙә...

- Бәхетләме һуң һин, Камила?

- Көтөү бәхетле итмәй, Гәзинур. Йәшәү бәхет бирә. Шуға өмөтләнәм.

- Камилам, мин һиңә бер нәмәне әйтергә теләйем... Ул саҡта...

- Һин уны әйтмә, Гәзинур, әле үҙем төҙөп ятҡан бәхетемде селпәрәмә килтерерһең. Мин уны ҡабат ҡора алмам.

- Камила!

- Исхаҡ та, Зөлфирә лә бында. Хәҙер һин нимә әйтә алаһың? Ана, ул ҡыҙыҡай ихатала. Үҙгәрҙе ваҡыт. Инде мин түгел, ә мине көтәләр! Яуабым шул булыр, Гәзинур. Тағы ла... Тағы ла шул. Һин башланмаған бер туйҙы хәтерләйһеңме? Селпәрәмә килгәйне. Инде был туйым селпәрәмә килмәҫ, тип уйлайым. Селпәрәмә килмәҫ.

Башын түбән эйгән Гәзинур әкрен генә сығыу яғына йүнәлде. Күптән түгел генә туйға әҙерләнеп зыҡ ҡупҡан өйҙә ҡәбер тынлығы урынлашҡан ине. Гәзинур алыҫлашҡан һайын, унда йәнлелек көсәйҙе. Бер аҙҙан ишектә Камила күренде. Ул, берәүҙе лә таный алмағандай, күҙҙәрен ҡыҫа биреп, һәммәһенә ҡарап сыҡты. Йылмайырға итте, булдыра алманы. Ҡапыл тышҡы ишек асылып китте. Унда, ашығып килеүҙәнме, тыны ҡыҫылған Исхаҡ йыш-йыш һулыш алып баҫып тора ине.

- Ул килде, - тине ҡыҙ ниндәйҙер ят тауыш менән. - Һин уны беләһең...

Камиланың бер ҡасан да Исхаҡҡа Гәзинур тураһында һөйләгәне булманы, ләкин уларҙың тарихтарын белеүенә шикләнмәй ине. Исхаҡ кәләшенән күҙен алмаған килеш баш ҡаҡты.

- Беҙ һөйләштек, - тине Камила ҡарашын ҡайҙалыр алыҫҡа төбәгән килеш. - Шунан ул китте. - Насар күргән кеше һымаҡ, Исхаҡҡа ныҡ итеп текәлде. - Һин миңә ышанмайһыңмы?

Исхаҡ тамағына тығылған төйөрҙө көс-хәл менән йотто. Ҡарлыҡҡан һаңғырау тауыш менән яуап ҡайтарҙы:

- Ышанам.

Камила баш ҡаҡты ла ишек яңағына тотона-тотона эскә атланы.

**(Дауамы. Башы 27-29-сы һандарҙа).**

*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

# КҮҢЕЛДӘРҘЕ ТЕТРӘНДЕРГӘН...

## тик тыуған ер бит ул

**Башҡортостан һәм Рәсәй яҙыусылар ойошмаһы ағзаһы Мәүлит Кәрими күптән ижад донъяһында. Шиғриәт, проза өлкәһендә үҙ һүҙен ваҡытында еткерә килгән өлгөр әҙип ул. Төрлө темаларға яҙылған үткер мәҡәләләре менән уҡыусылар даими танышып тора. Битараф булмаған күңел тыуған яғының матурлығын бөтәндәргә еткерә, аңлата белә, унда көн иткән шәхестәрҙең, яҡташтарының уңыштарын бәйән итә, тарихтан һабаҡ алырға саҡыра.**



➔ **Тыуған ергә берегеп, шунда үҙ хеҙмәтенең ҡыуаныстәмен татып йәшәгән ир-егеттәр һоҡланыу уятмай ҡалмай. Улар борон-борондан ата-бабалар аманатын үтәүселәр булып күҙ алдына килә. Ижадсы өсөн нимә ул тыуған ер, уның тартыу көсө нимәлә?**

- Әгәр һин берәй сәбәп арҡаһында ғына тыуған ереңдә йәшәйһең икән, был үҙ ереңә берегеү түгел әле. Тыуған ереңде һөйөп кенә ҡалмай, уға файҙа килтереп йәшәүең, ата-бабаларҙың аманатына тоғро булыуың - бына был кендек ҡаны тамған ереңә берегеү булалыр, һәм ул атай-әсәйеңдең тәрбиәһенән килә. Һинең мейеңә һеңдерерлек ошо тәрбиә, хатта өгөт-нәсихәт, ерлектәге эшкә, һөнәргә өйрәтеү булмаһа, йөрәгеңдә тыуған ереңә тартылыу көсө лә булмай, минеңсә. Тик кемдер үҙ ереңә тыумыштан берегә, кемдер (баяғы шул сәбәп арҡаһында) һуҙыраҡ.

Үҙемә килгәндә, ун ете йәшемдән тыуған йортомдо ташлап, утыҙ йылдан ашыу ситят ерҙәрҙә йәшәнем. Ижадымда тыуған йортом, ерем, атай-әсәйем тип йырлау менәнме ни... Еремдең тартыу көсө, әлбиттә, ныҡ ине. Ә үҙемдең уға тартылыу көсөм йөрәгемдә йәшәне. Шуныһы йәл, ҡайтып йәшәй башлауымды атай-әсәйем генә күреп өлгөрмәне. Улар иҫән булмаһалар ҙа ҡайттым! Тыуған йортомдоң ҡапҡаһында йоҙаҡ эленеп торһа ла (әле лә унда инеп булмай), ҡайттым! Шуға күрә, тыуыпүҫкән өйөмдә ҡала алмай, күрше ауылда төпләнергә тура килде. Был ике ауыл да минә ҡәҙерле, яҡын! Ғүмер буйы бында йәшәгәндәй беректем. Сөнки мин, нисек булһа ла, үҙ еремдә. Ижадсы өсөн иң мөһиме шулдыр. Күңелдәрҙе тетрәндергән дә, илһам менән һуғарған да тик тыуған ер бит ул.

➔ **Башҡорт ир-егетендә һеҙ иң элек ниндәй сифатты баһалайһығыҙ?**

- Башҡорт ир-егете баҫалҡы, шул уҡ ваҡытта ҡыйыу булырға тейеш. Баҫалҡылыҡ, әйтер һүҙеңде әйтмәй, шымып ҡалыу тигәнде аңлатмай. Күп һөйләмәй, тураһын, дөрөҫөн ярып әйтеү, икенсе кешене тыңлай белеү - мөһим сифаттар. Әлбиттә, артыҡ баҫалҡы булыу ҙа кәрәкмәй. Был саҡта үҙеңде баҫып алыуҙары бар. Тик һәр кеше лә бер үк түгел шул...

Ғаиләлә инде ул өлгөлө атай булырға тейеш. Насар ғәҙәттәре булһа, хатта тәмәке тартһа ла, балаларына күрһәтмәҫкә, яҡшы тәрбиә бирергә, әсәләрен хөрмәт итергә тейеш. Атай кешенең әсәйгә ҡарата төрлө яҡлы хөрмәт күрһәтеүе бала өсөн бик өлгөлө тәрбиә. Илебеҙгә, телебеҙгә ҡарата һөйөү уятыу, патриотик рухлы итеп үҫтереү атай кешенең бурысы. Ғөмүмән, матур, татыу ғаиләлә хөкөм һөргән яҡшы сифаттарҙы һанап бөтөрөрлөк тә түгелдер, уларҙы ҡабатлап һанауҙың кәрәге лә юҡтыр. Яҡшы кеше, йәғни башҡорт ир-егете, бар яҡтан да яҡшы булырға тейеш!

Әлеге һорауҙы дауам итеп, йәнем иң һөймәгән сифатлы (әллә сифатһыҙ?) кешеләрҙе лә әйтеп үтмәй булдыра алмайым. Әпкәләйҙәр улар. Тормошта үҙебеҙҙең арала ла бар улар, интернет аша ла үҙҙәрен күрһәтеп торалар. Ә инде ижадсыларҙың, ҡәләмдәштәрҙең араһындағы әпкәләйҙәр һәм әпкәләйлек күңелде бик өшөттөрә. Был сифат кемделер күтәрә, үҫтерә, кемделер бер урында тапандыра, хатта ижадын һүндерә. Ни хәл итмәк, кешелек шулай ҡоролған. Уны үҙгәртеп булмайҙыр...

➔ **Әле генә һеҙҙең Хәтер китабы донъя күрҙе. Унда сәйәси золом ҡорбандары булған яҡташтарығыҙҙың яҙмышы һүрәтләнә, билдәһеҙ булған яңы факттар асыҡлана. Хәтерле халыҡ ҡына - ғүмерле. Был китапты яҙырға һеҙҙе нимә этәрҙе?**

- Һуңғы осорҙа илебеҙгә, иңебеҙгә төшкән төрлө ауырлыҡтар, ҡайғылар беҙҙе уйланырға, бошонорға мәжбүр итә. Оҙаҡҡа һуҙылған коронавирус, һуғыш ҡайғылары ишек шаҡыған ғаиләләрҙең кисергәндәрен башҡаларға күрһәтмәһен! Шул уҡ ваҡытта тормошта яҡшы хәбәрҙәргә лә, ҡыуанысл ваҡиғаларға ла урын бар. Эйе, ошо көндәрҙә, ниһәйәт, ике йылдан ашыу ваҡыт сарыф итеп, Белорет районына бәйле архив документтарҙы туплап, сәйәси золом ҡорбандарының хәтер китабын төҙөп, баҫтырып сығарып, ҡулыма алдым.

Әгәр был мөһим эшкә тотонорға мине хеҙмәт ветераны, Белорет ҡалаһы һәм районының почетлы гражданы Солтан Мөжәүир улы Сиражетдинов ағай йәлеп итмәһә, "Хәтер китабы"н сығарыу ике ятып бер төшөмә лә инмәҫ ине. Оло башы менән ул үҙе мине эҙләп табып, өйгә килеп, изге ниәт менән йөрөүен белдерҙе. Бындай яуаплы эш миндә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Ҡатыным, икеләнеберәк: "Ҙур, ауыр, мәшәҡәтле эш күренә, әллә тотонмайһыңмы? Осона сығарып еткерә алырһыңмы?" - тиһә лә, үҙемдә ышаныс барлығын тойоп, эш башланым. Солтан ағай һуңынан, йыл дауамында, эш барышы тураһында телефон аша ла, килгеләп тә белешеп торҙо. Тик шуныһы бик ҡыҙғаныс: теүәл бер йылдан, 2021 йылдың ғинуар айында, Солтан Мөжәүир улы арабыҙҙан китеп барҙы. Ағай оло йәштәрҙә булғас, нисектер, һиҙгән кеүек, һау сағында хәтер китабын өлгөртһәм генә ярар ине, тиғән уй ҙа башыма ингеләне. Ни хәл итмәк, өлгөртмәнем...

"Хәтер китабы"на Солтан Сиражетдинов ағайҙың һәм уҙған быуаттың фажиғәле 30-сы йылдарындағы золом ҡорбандарының рухы моғайын да шатланғандыр.

Йыйынтыҡты баҫтырып сығарыуҙа үҙ өлөшөн индереүсе бағыусылар рәхмәт һүҙемде ишетер тип уйлайым. Киләсәктә, бәлки, кәрәк тип табылһа һәм аҡса мәсьәләһе хәл ителһә, китап өҫтәп нәшер ителер, тигән ышаныстамын.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

*ЗАУЫҠ*

*Мәүлит КӘРИМИ.*

# КӨМӨШ БАЛЫҠ

**(Әкиәт)**



Малай саҡта дуҫым менән
Барҙыҡ бер көн балыҡҡа.
Дуҫым кисеп балыҡ ҡыуҙы,
Ә мин һеҙҙәм яулыҡҡа.

Әллә ҡасып бөттөләрме,
Әллә инде уңманыҡ?
Ауыбыҙға бер бәрҙенән
Башҡа балыҡ тотманыҡ.

Дуҫым әйтә: "Ҡара әле,
Алтын балыҡ әләкте.
Теге әкиәттәгесә
Үтәр беҙҙең теләкте..."

Ысынлап та, ялтыр бәрҙе,
Ҡояшта бик сағылды.
Тәңкәләре нурҙар яғып,
Йәйғор булып ағылды.

Ҡапыл хәлһеҙ тауыш менән
Өндәште балығыбыҙ:
"Һыуға, һыуға мине тиҙ[е]рәк
Ебәрегеҙ, һалығыҙ!

Ҡотҡарһағыҙ, үтәй алам
Өс теләк түгел - берҙе.
Көмөш балыҡ мин, малайҙар,
Беләм мөғжизә, серҙе..."

- Һы, - тип ҡалдыҡ аптыраштa,
Ултыра төштөк башта.
Бер теләкте нисек бүлеү
Уйы ла булды башта.

Көмөш икән көмөш булһын, -
Ебәрҙек биҙрәбеҙгә.
Дуҫым менән баш ватабыҙ,
Нимә теләргә беҙгә?

Икебеҙгә уртаҡ теләк
Килеп сыҡмай бит, малай!
Әллә байлыҡ, аҡса һорап,
Бүлешергә урталай?

Бәхәсебеҙҙе ишетеп,
Үҙ һүҙен әйтте балыҡ:
"Изге теләк кенә мөмкин,
Был, һуң, түгелме байлыҡ?

Иғтибарлап тыңлағыҙ тик,
Кәнәш шундай шарт менән:
Аяғөҫтө бер-берегеҙгә
Әйләнегеҙ арт менән!"

Ҡыҙыҡһынып тороп баҫтыҡ
Арҡаға-арҡа терәп.
Балыҡ әйтте: "Эстән генә
Теләгеҙ изге теләк...

...Күрәм, егет булғанһығыҙ,
Теләктәрегеҙ хәтәр.
Бер-берегеҙ менән генә
Уртаҡлашмағыҙ, мәгәр!"

Бәрҙене һыуға ебәрҙек,
Алйып торҙоҡ бер килке.
Ситтән ҡарағанда беҙгә,
Күренгәнбеҙҙер көлкө.

Дуҫымдың ғына теләге
Булды микән изгенән?
Хәйер, балыҡ үҙе әйтте
Күргән кеүек көҙгөнән.

Аҡҡан һыуҙай, бик ашҡынып,
Уҙҙы ла уҙҙы йылдар.
Тик тормошҡа аштылармы
Беҙҙең матур хыялдар?

...Алданғанбыҙ бала саҡта,
Алдағанбыҙ йөрәкте:
Берәр теләк теләһәк тә,
Теләгәнбеҙ берүкте.

Икебеҙҙең дә хыялда
Булған бер үк ҡыҙ бала.
Икебеҙ ҙә уны үлеп,
Һөйгәнбеҙ был донъяла.

Ул да һөйгән беҙҙе бер үк,
Бала сағынан, теләп.
Тик телгән берҙе түгел,
Өҫтән дә ашыу теләк.

Тәү теләге - ярай, ул мин,
Дуҫым булды - икенсе.
"Теләктәре" сират торҙо,
Өс, дүрт һәм дә бишенсе...

Шулай ҙа һеҙ ышанығыҙ,
Бала саҡ хыялына!
Унан да юҡ изге теләк,
Булһа ла хыял ғына.

Бала саҡҡа алып ҡайтҡан
Әкиәтем дә тамам.
Тәүге мөхәббәтем генә,
Әкиәттәләр һаман.

✓ *Улар дәррәү килеп төрлө конкурстарҙа, ярыш-бәйгеләрҙә ҡатнашты. Бигерәк тә "Ҡатай батыры", "Ҡатай һылыуы", "Йәш ҡатай", "Мәргән уҡсы" конкурстары мауыҡтырғыс һәм дәртле барҙы.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТИК ЫҢҒАЙҘЫ КҮР!

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре ғалим-математиктары үҙенсәлекле асыш яһаған. Улар Ер йөҙөндә тәүлегенә 24 сәғәт дауамында бер минутҡа ла тынмай аҙан тауышы (Аллаһты маҡтау һүҙҙәре, шул уҡ ваҡытта намаҙға саҡырыу булып тора) яңғырауын иҫбатлаған. Улар аңлатыуынса, беҙҙең планета 360 ваҡыт меридианына бүленә. Был меридиандарҙың һәр береһе икенсеһенән 4 минутҡа айырыла. Аҙан аныҡ бер ваҡытта уҡылырға тейеш һәм дөрөҫ яңғырағанда уның оҙайлығы 4 минутҡа һуҙыла. Шуға күрә, бер меридианда тамамлағандан һуң, намаҙға саҡырыу шунда уҡ икенсеһендә башлана. Шулай итеп, аҙан Ерҙә туҡтауһыҙ тәүлегенә 1440 минут, йәки 24 сәғәт яңғырап тора.

■ Ноттингема университеты (Бөйөк Британия) тикшеренеүселәре ипотека менән кредиттарҙың кешенең эмоциональ торошона насар тәьҫир итеүен билдергән. Улар ун меңгә яҡын Британия халҡының 1991 һәм 2008 йылдар араһындағы матди һәм эмоциональ торошо тураһындағы мәғлүмәттәрҙе анализлап ҡараған һәм ошондай һығымтаға килгән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың барыһынан да аҡса, шулай уҡ йоҡоһоҙлоҡ, үҙ-үҙеңә булған ышаныс һәм иғтибарҙы туплау һәләте тураһында һорағандар. Асыҡланыуынса, кем кредит йөкләмәһен ауырлыҡ менән үтәгән, уларҙа өмөтһеҙлек, хәүеф, үҙенде бер нәмәгә һәләтһеҙ тойоу көҙәтелгән һәм был кешеләр йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланған. Үҙ ваҡытында игәнә индерә алмаған һәр бишенсе кеше депрессия кисергән. Был иң тәү сиратта ипотека алыусыларҙа асыҡ сағылған - оҙайлы ваҡытҡа алынған аҡсалата бурыс уларҙың психикаһына насар тәьҫир иткән.

■ Аҙна буйы йоҡо туймай йөрөгәндән һуң күптәр ял көндәрендә оҙағыраҡ йоҡларға тырыша. Әммә Американың Техас университеты ғалимдары был ғәҙәттең беҙгә көс өҫтәмәүен белдерә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Грегори Картер аңлатыуынса, әгәр ҙә ял көнө бер сәғәткә генә булһа ла оҙағыраҡ йоҡлаһаң, көн менән төндөң алышыныуына бәйле биологик процестар боҙола һәм аҙна башланыуына улар ике сәғәткә артҡа шылыуы бар. Әлбиттә, аҙна аҙағына был процестар кире урынына ултыраcаҡ, әммә ял көндәрендә кире боҙоласаҡ. Ә был организм өсөн артыҡ стресс. Көн һайын иртәрәк йоҡларға ятып, һигеҙ сәғәт йоҡлауҙан да яҡшырағы юҡ, тип кәңәш итә белгестәр.

АФАРИН!

# ЙӨЙӘККӘЙЕМ - ИЛҺАМ БИРЕР ТӨЙӘККӘЙЕМ!




Рәнис Алтынбаев улы Рамаҙан менән йыр һуҙа.



Һылыуҡайҙарҙы баһалаусылар.

**Белорет районының иң матур ауылдарының береһе Йөйәктә ҙур байрам - "Иҙелбашы" этнофорумы сиктәрендә ун беренсе тапҡыр ҡатай ырыуы йәштәре йыйыны һәм "Йөйәккәйем - илһам бирер төйәккәйем" исемле ҙур байрам үтте.**

Байрам иҫ китмәле матур ойошторолдо. Халыҡтың күплеге шатландырҙы. Райондың күпселек өлөшөн ҡатай ырыуы вәкилдәре тәшкил иткәнлектән, ырыу йыйынына халыҡтың шулай эркелеп килеүенә аптырарлыҡ түгел ине инде. Ике меңдән ашыу халыҡты туплаған йыйын күккә олғашҡан Өкө тауы эргәһендә, Инйәр йылғаһы буйында, ҡолас етмәслек тирәктәр үҫкән ерҙә ойошторолдо. Байрамға республикабыҙҙың Балаҡатай, Ҡыйғы, Белорет районларынан, Межгорье, Нефтекама, Өфө ҡалаларынан, шулай уҡ Силәбе өлкәһенән ырыуҙаштар йыйылды. Эҫе ҡояш нурҙары ла ҡурҡытманы халыҡты. Улар дәррәү килеп төрлө конкурстарҙа, ярыш-бәйгеләрҙә ҡатнашты. Бигерәк тә "Ҡатай батыры", "Ҡатай һылыуы", "Йәш ҡатай", "Мәргән уҡсы" конкурстары мауыҡтырғыс һәм дәртле барҙы. Тамаша ҡылыусылар иһә бәйгеләрҙә ҡатнашҡан яҡташтарын дәртләндереп, алҡышлап торҙо. Ярыштар барған арала сәхнәлә артистарҙың, үҙешмәкәрҙәрҙең дәртле йырбейеүҙәре бер-береһен алыштырҙы.

### Бүре алыр егетте бүркенән танырҙар

Һәр ҡатай йыйыны "Ҡатай батыры" ярышынан тыш үтмәй. Таш күтәреү буйынса ярышты ҡатай егеттәре! Конкурсты Илдар Шәрипов ойоштороҙо. Батырҙар көстәрен һынарға бер-бер артлы теҙелде. Бәйгене ҡарарға килгән халыҡ батырҙарҙы ҡулсаға алды. Өс турҙан торған бәйгене халыҡ ҡыҙыҡһынып, дәртләнеп, үҙара бәхәсләшеп күҙәтте. 30-ҙан алып 90 килограмм ауырлыҡтағы таштарҙы күтәреп ярышыуҙа Йөйәк баһадирҙары Ғәзиз Мансуров, Фәнзил Муллағәлимов, Айҙар Искәндәров, Вилдан Хөснөтдинов, Фируз Хөснөтдинов, Сыңғыҙ Закиров, Айгизәр Ғәйнетдинов, Линар Солтанов, Межгорьенан Дим Сөләймәнов, Вәгиз Фәхретдинов, Сәрмәндән Руслан Ҡужаҡов, Ғәбдҡтән Мостафа Ғәббәсов, Инйәрҙән Алик Мөсәлимов ҡатнашты. Егеттәргә етеҙлек, дәрт, ҡул көслөлөгә, бил ныҡлығы кәрәк булды был бәйгелә. Ифрат ауыр таштарҙы кемдер 16 тапҡыр, кемдер 60 тапҡыр баш осона тиклем күтәреп, йыйылыусыларҙы хайран итте. Иң ғәжәпләндергәне һәм һоҡландырғаны: таш күтәреү конкурсында ҡатай егеттәре менән бер рәттән Бирҙеғол ауылынан 63 йәшлек Әнисә Зияитдинова ла ҡатнашты. Һәр бәйгенең еңеүселәре, иң-иңдәре була. III урын Межгорьенан Вәгиз Фәхретдиновҡа тапшырылды, II урын Инйәр батыры Алик Мөсәлимовҡа бирелде, I урынды Йөйәк бөркөтө Фируз Хөснөтдинов яуланы. "Иҙелбашы" этнофорумының XI "Ҡатай батыры" титулына, Гран приға Межгорьенан Дим Сөләймәнов лайыҡ булды. Бына тигән рухлы, бына тигән дәртле егеттәр-бөркөттәр үҫә ҡатай ырыуында!




Таш күтәреү ярышында еңеүсе Д. Сөләймәнов.

### Их, һылыу шул ҡатай ҡыҙҙары!

Ҡатай ырыуы йәштәре йыйынының тағы бер бәйгеһе - "Ҡатай һылыуы" конкурсында ҡатнашҡан гүзәлкәйҙәр үҙҙәренең белемен, хыялдарын, тормошҡа ҡарашын, шулай уҡ нәфис һүҙгә, йыр-моңға, бейеүгә оҫталыҡтарын күрһәтергә тейеш ине. Сибәрлек йөҙҙә генә түгел, тыйнаҡлыҡта, аҡылда, тәрбиәлелектә, иманда һәм нәфислектә, нәзәкәтлектә, шулай уҡ эшһөйәрлектә лә - был әләсәйҙәрҙән тапшырылған ҡағиҙә. Бер-бер артлы сәхнә түренә теҙелгән һылыуҡайҙар был ҡа-

УҠЫУСЫ ЯҘА

# САМОЛЕТ ТОРБАҺЫН ҠУРАЙ ИТЕП...



**Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт яугирҙарының самолет торбаһынан ҡурай эшләп уйнауы хаҡында ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Шундай дәһшәтле алыштарҙы күп күргән һәм тыуған моңон ишетеүгә зар булып, сит-ят ерҙәр тапаған милләттәштәребеҙҙең береһе Нурмөхәмәт Мусин булған.**

Мусин Нурмөхәмәт Әбүләис улы 1911 йылда Баймаҡ районының Яңғаҙы ауылында тыуған. Ул бик йәшләй етем ҡалып, Зәһира һәм Мостафа Тимербулатовтар ғаиләһендә тәрбиәләнә. Мал көткәндә кин яланда йырлап, ҡурайҙа ла һыҙғырып ебәрер булған. Ҡурайҙа уйнау маһирлығын, яңы көйҙәрҙе Нурмөхәмәт данлыҡлы ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтан өйрәнә. Йәше еткәс, үҙ теләге менән армияға китә һәм 1931 йылдың декабренән алып, 1933 йылға тиклем 10-сы кавалерия полкында кавалерист, артабан 1934 йылға тиклем взвод ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә.

Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, Һамарҙа тракторсылар әҙерләү мәктәбендә директор вазифаһын башҡара. Намыҫлы, эшсән, егәрле егетте артабан уҡырға ондәп, Мәскәүгә юғары партия мәктәбенә ебәрәләр. Уны уңышлы тамамлап ҡайтҡас, тыуған ауылы Яңғаҙыла хужалыҡ рәйесе итеп тәғәйенләнә. Халыҡтың ауыр тормошон бер аҙ енеләйтер өсөн Нурмөхәмәт эшсәләренә иген таратып бирә. Әлбиттә, был ҡылығы эҙһеҙ үтмәй. Дәүләт милкен һорауһыҙ тотонғаны өсөн ғәйепләп, төрмәгә ябалар. Тап ошо 1941 йылда илебеҙгә немец илбаҫарҙары ябырылып, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Үҙ теләге менән 1943 йылдың авгусында Нурмөхәмәт Мусин төрмәнән һуғышҡа алынып, 29-сы Көнбайыш уҡсылар полкына эләгә. Һуғышта ул 361-се уҡсылар полкының станоклы пулемет

*✓ Ағинәйҙең йорт-музейында үҙ ҡулдары менән теккән, сиккән милли кейем өлгөләре, хәситә, яға-түшелдерек, селтәр, һаҡал кеүек биҙәүестәр, таҡыя, ҡашмау, сарыҡ, балаҫтар, сергетыш һәм башҡа әйберҙәр урынлаштырылған.*




Ҡатай һылыуҡайҙары.


Ағинәй Гөлсирә Салауатова.

ғиҙәләрҙе һанлағандарҙан булып сыҡты. Шуға ла баһалау комиссияһына ингән абруйлы ҡатай вәкилдәренә - Башҡортостандың халыҡ артистары Рәмил Ғәйзуллин, Риф Ғәбитов һәм "Башҡортостан" дәүләт концерт залы директоры урынбаҫары Хәлил Хәмзинға ҡыҙҙарға лайыҡлы мәрәй ҡуйыу бер аҙ ауырыраҡҡа ла тура килгәндер. Шулай итеп, Балаҡатай районы Түбәнге Үтәш ауылынан Эмилия Ниғәмәтйәнова, Белорет районы Инйәр ауылынан Айгүзәл Валаманова III урынға, Ҡоҙғон-Әхмәр ауылынан Айгөл Мөхәмәтшина, Уҫманғәле ауылынан Зөлфиә Салауатова II урынға лайыҡ булды, Сәрмәндән Диана Вәхитоваға I урын бирелде. "Ҡатай һылыуы" конкурсы тажына һәм еңеүсе таҫмаһына Бриш ауылы сибәре Элина Фәхретдинова лайыҡ булды.

## Ҡатай уғатарҙары ярышҡа сыҡты

Мәргән уҡсылар ярышы һуңғы йылдарҙа бик популяр спорт төрөнә әйләнде һәм унда олоһонан алып кеселәненә тиклем ҡатнаша. Уҡ атырға ҡатын-ҡыҙҙар ҙа әүәҫләнеп китте. Ҡатай ырыуы йәштәре йыйынының да бер биҙәге булып торҙо мәргән уҡсылар ярышы. Сәпкә уҡтың барып ҡаҙалыуын һәр кем ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтте, оҫталығы булғандар ярыш барышында янды нисек тоторға, уҡтан нисек атырға тигән кәңәштәрен биреп торҙо. Ни тиһәң дә, уҡтан атыу уйын эш түгел, ә олатай-атайҙарҙан ҡалған етди һөнәр. Бында сослоҡ, дәрт, көс кәрәк. Ярышта бик күптәр мәргәнлектәрен һынап ҡараны. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәр кемгә отҡорлоҡ, мәргәнлек бирелмәй шул. Уҡтары сәпкә теймәй, әллә ҡайҙа, яҙа осҡандар конкурстан тиҙ арала төшөп ҡалды. Ә бына уҡ-ян менән оҫта ғына эш итә белгәндәр бирешмәне. Һәр кем еңеүсе титулын яуларға тырышты.

Балалар араһында мәргән уҡсы исеменә лайыҡлы тип табылып, III урынды алған Вилнур Хәсәнов, II урынды яулаған Динислам Үҙәнбаев ҡыуаныстарынан һә тигәнсе сәхнәгә күтәрелделәр. Ә бына беренселекте эләктергән Вита Носкова барыһын да хайран ҡалдырҙы. Бәләкәй генә ҡыҙ бала үтә мәргән, оҫта уҡсы булып сыҡты. Афарин, был ҡыҙ балаға! Шулай уҡ "Иң йәш уҡсы" номинацияһына Йәзилә Үҙәнбаева лайыҡ булды. Ул ярышта ҡатнашыусылар араһында иң кесеһе ине. Тәжрибәләре булған, күп тапҡыр еңеүҙәр яулаған, быуындары ныҒынған уҡсылар араһында III урынды Алеся Хәсәнова, II урынды Айнур Ибраһимов, I урынды Марат Әхәтов яуланы.

## Ағинәйҙәр ҡояш нуры һибә!

"Йөйәккәйем - илһам бирер төйәккәйем" байрамын Белорет районы Йөйәк, Межгорье, Ғәбдөк, Инйәр, Уҫманғәле, Бирҙеғол, Манышты, Асы һәм башҡа ауылдарҙың ерлеккә генә хас милли кейемдәрҙәге ағинәйҙәре лә биҙәне. Улар ҡумыҙҙа ла уйнаны, баян моңдарына ҡушылып йырланы ла, бейеп тә китте. Байрам йәме, биҙәге булып, йәштәргә иплелек, нәзәкәтлек өлгөһө күрһәтеп, тәрбиә һабаҡтары ла бирҙе. Матур кейемле өләсәй-инәйҙәрҙе күргән бала-саға ла, шаярышып йөрөгән ерҙәренән туҡтап ҡалып, уларға ситкә тайпылып юл бирҙе, үҙҙәрен тәртипле тоторға тырышты.

Районда ғына түгел, республикала иң тәүгеләрҙән булып башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейем өлгөләрен, биҙәүестәрен тергеҙә башлаған Йөйәк ауылы ағинәйе Гөлсирә Салауатова ҡунаҡтарҙы үҙ тирмәһен ҡороп ҡаршы алды. Тирмәне Гөлсирә Исламетдин ҡыҙының иҫ киткес матур ҡул эштәре биҙәй, ә ағинәйҙәр әҙерләгән табын милли аштар менән тулы. Ағинәйҙәр арыу-талыу белмәй көн оҙоно аш-һыу янында йүгерекләне, ситтән килгән ҡунаҡтарға ҡунаҡсыллыҡ, йәш ҡыҙҙарға, килендәргә үрнәк күрһәтте. Ҡатай йыйынына килгән "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева, "Урал" гәзитенең баш мөхәррире Сатура Жәүәт ҡыҙы Минһажетдинова йәмле Инйәр йылғаһы буйында "Ағинәйҙәрҙең йәш быуынды тәрбиәләүҙәге мөҡәддәс бурысы" темаһына әңгәмә үткәрҙе. Ағинәйҙәр бер-береһе менән фекер алышты, иҫтәлеккә бергәләп фото төштө.

Йыйындың икенсе өлөшөндә Гөлсирә Салауатова ағинәйҙәрҙе үҙенең башҡорт милли ҡомартҡы-хазиналары менән биҙәлгән өйөнә саҡырҙы. Ағинәйҙең йорт-музейында үҙ ҡулдары менән теккән, сиккән милли кейем өлгөләре, хәситә, яға-түшелдерек, селтәр, һаҡал кеүек биҙәүестәр, таҡыя, ҡалпаҡ, ҡашмау, сарыҡ, балаҫтар, сергетыш, янсыҡ-кисеттәр, ҡурсаҡтар һәм башҡа һанап бөткөһөҙ әйберҙәр урынлаштырылған. Гөлсирә Исламетдин ҡыҙы ошо көндәрҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иң боронғо баш кейеме - кәләпүште тегеп бөткән. Был ҙур һәм ауыр эш айҙан ашыу ваҡыт талап иткән. Ағинәйҙәр Гөлсирә Салауат ҡыҙының эштәренә хайран ҡалып, уға һаулыҡ һәм оҙон ғүмер теләп таралышты. Был осрашыу, һис һүҙһеҙ, байрамдың үҙенсәлекле бер өлөшө булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауылға ошо байрам менән дәрт, матурлыҡ, моң ҡайтты, ауылдаштарҙың, яҡташтарҙың күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондары уйнаны. Байрамдар шуның өсөн - күңел төшөнкөлөгөнән, сараһыҙлыҡтан арындырыу, күңелдәргә "Беҙ барбыҙ, булғанбыҙ, буласаҡбыҙ әле", тигәнде һеңдереү, халҡыңдың көнитмешенә, тарихына, тамырҙарға хөрмәт, һөйөү уятыу өсөн үткәрелә лә бит инде...**

**Сатура МИНҺАЖЕТДИНОВА.**

отделениеһы командиры, 275-се уҡсылар гвардияһы полк старшинаһы дәрәжәһенә тиклем үрләтелә. Орша, Борисов, Молодечно, Невель ҡалаларын алыуҙа ҡатнаша. Батыр яраһыҙ булмай, тигән кеүек, бер нисә тапҡыр яраланып, госпиталдә ятып сыға. Беларусь, Литва, Кенигсберг ерҙәрен дошмандарҙан азат итеүҙә оло батырлыҡ күрһәтә. Был турала уның 3-сө дәрәжә Дан, 3-сө дәрәжә Ватан һуғышы ордендары, "Батырлыҡ өсөн", "Кенигсбергты азат иткән өсөн" миҙалдары ла һөйләй. Бөйөк Еңеүҙе ул Пруссияла ҡаршылай.

Әммә Нурмөхәмәт Әбүләис улына тиҙ генә тыуған иленә ҡайтыу насип булмай. Гитлер Германияһын еңгәндән һуң, ул Алыҫ Көнсығышҡа ебәрелә. Унда Беренсе Байкал аръяғы фронты составында Порт-Артурҙы алыуҙа, Квантун армияһын тар-мар итеүҙә ҡатнаша. Японлар менән һуғыш ваҡытында ул ҡолап төшөп, емерелеп ятҡан самолеттың бер еҙ торбаһынан ҡурай эшләп, башҡорт көйҙәрен уйнап ебәрә. Ошо ҡурай моңон ишетеп, тирә-яҡтан башҡорт егеттәре йыйылып китә һәм кинәнеп тыңлайҙар...

Ниһайәт, 1946 йылда барлыҡ орден-миҙалдарына "Японияны еңгән өсөн" миҙалын ҡушып тағып, тыуған тупрағына аяҡ баҫа яҡташыбыҙ. 1960 йылда өйләнеп, күрше Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылында төпләнә. Ҡатыны Мәсрүғә менән Абдрахман, Хәбибрахман, Мәшүҙә исемле балалар үҫтерәләр. Нурмөхәмәт Әбүләис улы үләндәрҙе яҡшы белеп, кешеләрҙе һауыҡтырыу һәләтенә лә эйә була. Был турала хатта биология фәндәре докторы, профессор С.И. Йәнтүриндың "Үҫемлектәрҙең серле донъяһы" китабында ла бәйән ителә. Шулай уҡ ветеран мәктәптә ҡурай түңәрәген алып бара. Уның ҡайһы бер уҡыусылары хәҙерге көндә үҙҙәре инде әллә күпме балаға ҡурай серҙәрен төшөндөрә. Художестволы үҙешмәкәрлек эшендә лә бик әүҙем ҡатнаша: һәр концертта, һабантуйҙарҙа ҡулынан ҡурайы төшмәй. Әйткәндәй, уның турала лаҡап та йөрөй тыуған яҡтарында. Шулай, ҡыштың бер көнөндә киләһе концертына йыйынып йөрөгән иренә ҡатыны Мәсрүғәнең: "Мал күп, шуларҙы ҡарашмай, концерттан-концертҡа тик йөрөйһөң", - тиүенә ул: "Мал кәрәкмәй, дан кәрәк!" - тип яуап ҡайтарған, ти.

Һуғыш ветераны, атаҡлы ҡурайсы Нурмөхәмәт Әбүләис улы Мусинды Иҫәнгилде ауылы халҡы әле лә онотмай. Район үҙәге Аҡъяр музейында ла уның тураһында бай мәғлүмәт тупланған.

**Розалия ТЕҮӘЛБАЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аң торошоноң үҙгәреүен үлсәү өсөн һыу ҡулланыу

Ваҡыты-ваҡыты менән тормош күңелһеҙ ҙә булып китә. Был үҙ аңыбыҙ менән яңылыш идара иткәндән түгел, ә икенсе кемдер йәки икенсе нимәлер яңылыш идара итеүҙе тормошҡа ашырғандан шулай килеп сыға.

Барыһы ла ата-әсәнән һәм уҡытыусыларҙан башлана, һуңынан бөтөн тормошобоҙға тарала. Идара итеүҙең нескә формаһы - киң мәғлүмәт саралары яғынан һөжүм. Улар беҙ нимә кейергә, нимә ашарға, ҡайһы яҡҡа йүнәлеш тоторға тейешбеҙ, тигән ҡарарҙарыбыҙға көслө йоғонто яһай.

Был яҙмалар аң ныҡ тәьҫир иткән тән сәләмәтлегенә бағышлана. Һеҙҙе, йөрәгегеҙ уйламағанда насар эшләй башлауы мөмкин, тип иҫкәртәләр: гәзиттәр, журналдар, радио-телевидение йөрәк эшмәкәрлеген тикшереүҙе финанслауҙы арттырыу тураһындағы мәғлүмәт менән тулған. Һәр саҡ йөрәк өйәнәге тураһында ишетеү һеҙҙә ҡурҡыу тойғоһо уята. Уның нисек булыуы тураһында уйланаһығыҙ. Төпкө аңығыҙҙа: "Сираттағы кешенең мин булыуы ла мөмкин", - тигән уй тыуа. Уларҙы раҫларға теләгәндәй, киң мәғлүмәт саралары ла: "Сираттағы кеше һеҙ булыуығыҙ ихтимал", - тип ҡабатлай.

Был теманан ситкә тайпылып, һыу темаһына күсәйек. Төштәрҙә төпкө аң һыу менән кәүҙәләнә. Беҙҙең тәнебеҙ 80 процентҡа һыуҙан тора. Һыу, аң һәм кеше организмы бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. Был һыуға бәйле дауалауҙың төрлө формаларына һәм рухи күнекмәләр тыуыуға килтерә.

Йылы һыуға төшөү менән хәүефһеҙлек, бәхет һәм тыныслыҡ тойғоһо тыуа. Бында нимә ҡулланыуығыҙ мөһим түгел: ул йылға ла, ванна ла, океан да булыуы мөмкин. Һыу көсөргәнеште, кире уйҙарҙы, ниндәйҙер кимәлдә йорт хәстәрлектәренең, эштәге проблемаларҙың һәм гәзит мәҡәләләренең йоғонтоһон йыуып төшөрә.

Массачусетс технология институтында беҙҙе һыу - универсаль иреткес, тип уҡыттылар. Әммә уҡытыусы уның ярҙамында проблемаларҙы "иретеп" була икәнлеген әйтмәне. Ә Сильва ысулында һыулы стакан тап шул маҡсатта файҙаланыла.

Аңдың үҙгәргән торошон саҡырыусы "йөҙөүсе йәшниктәр" хәҙер ныҡлы танылыу таба. Йылы ванналар ребефингта - кешенең ҡабаттан тыуып, әсә ҡарынынан айырылған ваҡытта алған травмаларын асыҡлау ысулында ҡулланыла.

Хәҙер баланы һыу эсендә табыу популярлаша бара. "Аң һәм тән" тупланмаһындағы отчетҡа ярашлы, 1995 йылдың апрелендә Лондонда 1100 акушер йыйылып, бала тапҡан ваҡытта ауыртыуҙы баҫыусы наркотиктарға бәйле ысулдарға ҡарағанда, һыуҙа бала табыуҙың 9 мең осрағын уңышлы тип һанауын белдерә. Һыу аналыҡтың бала ятҡан һыу менән тулы урынына оҡшаш, шуға ла һыу сабыйҙарға яҡты донъяға тыуыуҙың травмалы йоғонтоһон кәметә. Яңы тыуған балалар - тыумыштын йөҙөүселәр, һыу аҫтында тын ала белә.

Шулай булғас, ниңә һеҙгә тормошта уңыш һәм бәхет ҡаҙаныу юлында кәртә булып торған ҡаршылыҡтарҙы йыуып төшөрөү өсөн йылы һыу ҡулланмаҫҡа? Ошо алым менән юлығыҙға башҡалар ҡуйған ҡаршылыҡтарҙы һәм кәртәләрҙе лә универсаль иретеүсе - һыу ярҙамында алып ташлай алаһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**15 АВГУСТА**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
1.05 Х/ф "Сибириада". [12+]
2.15, 3.05 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
4.00 Т/с "Морозова". [12+]

**БСТ**

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Новости недели (на рус.яз).
14.45 Специальный репортаж. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 История одного села. [12+]
17.45 "Орнамент". [6+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Д/ф "Археостан". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Бизнес-обзор. [12+]
21.00 "Яйляу". [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Тайм-аут. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Күстәнәс. [12+]
23.30 Х/ф "Смешанные чувства". [16+]
1.30 Бәхетнамә. [12+]
2.15 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]
4.15 Тайм-аут. [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**16 АВГУСТА**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
1.05 Х/ф "Сибириада". [12+]
2.15, 3.05 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
4.00 Т/с "Морозова". [12+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Юные Пифагоры". [6+]
15.30 "КультУра". [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Бизнес-обзор. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Это моя профессия". [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Лабиринты любви". [16+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Любовь на троих". [12+]
4.00 Х/ф "Лабиринты любви". [16+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**17 АВГУСТА**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
1.05 Х/ф "Сибириада". [12+]
2.30, 3.15 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
4.00 Т/с "Морозова". [12+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Яйляу". [6+]
15.45 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 Тайм-аут. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 "Байык" представляет... [12+]
0.00 Х/ф "Оперативная разработка". [16+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Неравные". [12+]
3.30 Автограф. [12+]
4.15 Башкорттар. [6+]
4.45 Әлләсе... [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**18 АВГУСТА**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
1.05 Х/ф "Сибириада". [12+]
2.15, 3.05 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
4.00 Т/с "Морозова". [12+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Это моя профессия". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.45 История одного села. [12+]
0.00 Х/ф "Оперативная разработка-2. Комбинат". [16+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Заноза". [12+]
3.30 Х/ф "Оперативная разработка-2. Комбинат". [16+]
5.15 История одного села. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).
5.07 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.

**19 АВГУСТА**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Х/ф "Дорогие товарищи!"
23.30 Х/ф "Рай". [16+]
1.40 Белая студия.
2.25 Х/ф "Страсти по Андрею". [12+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән гүмер. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Республика LIVE #дома. [12+]
20.00 Специальный репортаж. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Йома". [0+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Автограф. [12+]
23.45 История одного села. [12+]
0.00 Х/ф "Пушкин. Последняя дуэль". [12+]
2.15 Спектакль "Гильмияза". [12+]
4.15 Автограф. [12+]
4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 История одного села. [12+]
5.45 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**20 АВГУСТА**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

6.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.55 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Х/ф "Святая ложь". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Вторая попытка". [12+]
0.55 Х/ф "Тили-тили тесто". [12+]
3.50 Х/ф "Не покидай меня, Любовь". [12+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [6+]
11.30 Нык бул. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Бәхетнамә. [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Памяти Хусаина Ахметова… Концерт. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Ради добра. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Х/ф "Гоголь. Ближайший". [12+]
1.00 Новости недели (на баш. яз).
1.45 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]
4.00 Х/ф "Гоголь. Ближайший". [12+]
5.45 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**21 АВГУСТА**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.35, 2.50 Х/ф "Блестящей жизни лепесток". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.40 Х/ф "Солнечный удар". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Человек неунывающий". [12+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30 Историческая среда. [12+]
16.15 "Благодарен судьбе". Юбилейный концерт народного артиста РБ Радика Вальмухаметова. [12+]
18.30 Спектакль "Голубушки мои". [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Х/ф "Сын полка". [12+]
1.15 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]
4.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
4.30 Историческая среда. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

# НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Август (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (17) дүшәмбе | 4:22 | 5:52 | 13:30 | 18:25 | 20:46 | 22:16 |
| 16 (18) шишәмбе | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 18:23 | 20:44 | 22:14 |
| 17 (19) шаршамбы | 4:26 | 5:56 | 13:30 | 18:21 | 20:42 | 22:12 |
| 18 (20) кесе йома | 4:28 | 5:58 | 13:30 | 18:20 | 20:40 | 22:10 |
| 19 (21) йома | 4:30 | 6:00 | 13:30 | 18:19 | 20:37 | 22:07 |
| 20 (22) шәмбе | 4:32 | 6:02 | 13:30 | 18:17 | 20:35 | 22:05 |
| 21 (23) йәкшәмбе | 4:33 | 6:03 | 13:30 | 18:16 | 20:33 | 22:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА АЛЬПИНИЗМ КӨНӨНӘ -

## ҡитғаларҙың иң бейек түбәләре




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**31-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Һарыҡ. Сурағол. Йүгән. Таҡта. Ҡобау. Ҡойон. Тарихсы. Тарма. Ҡондоҙ. Алоха. Төк. Булат. Оҫта. Ойоҡ. Лапаҫ. Аҡса. Алама. Ҡойма. Самауыр. Нишатыр.

**Вертикаль буйынса:** Табанкүл. Тереғолов. Хисамова. Сорт. Ләйсән. Аҡыҡ. Һарай. Тоҡом. Аждаһа. Гвоздикова. Ҡауҙы. Ҡолон. Рур. Ҡот. Балаҡ. Айыу. Маша. Уҡа. Таҫма.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ОСОШТАР, БОКС...



• Аэрофлот 15 июлдән - Бодрумға, ә 17 июлдән Даламанға рейстарҙы тергеҙҙе, тип хәбәр итте компанияның матбуғат хеҙмәте. Бодрумға рейстар Мәскәүҙән көн һайын башҡарыла. Даламанға рейстар Airbus A320 самолеттарында аҙнаһына өс тапҡыр дүшәмбе, кесаҙна һәм йәкшәмбе көндәрендә була. Бынан алда "Башинформ" 1 июлдән "Аэрофлот" һәм "Рәсәй" авиакомпанияларының "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан осоштар йышлығын арттырыуы хаҡында хәбәр иткәйне.

• Өфөнән Сочиҙың Имеретия курортына тиклем өҫтәмә поезд йөрөй башланы, тип хәбәр итте Куйбышев тимер юлының матбуғат хеҙмәте. 559/560-сы поезд популяр ял итеү урынына 31 июлдә, 3, 5, 8, 10, 13, 18, 19, 24, 26, 29, 31 августа, 3, 5, 8, 10, 13 сентябрҙә юллана. Башҡортостандың баш ҡалаһына состав 2, 5, 7, 10, 12, 15, 20, 21, 26, 28, 31 августа, 2, 5, 7, 10, 12 һәм 15 сентябрҙә юлға сыға. "Юлда төп туҡталыштар - Һамар, Һарытау, Волгоград, Сальск, Краснодар, Горячий Ключ, Лазаревская һәм Адлер", - тип билдәләнеләр Куйбышев тимер юлында.

• Яңы уҡыу йылынан Башҡортостанда "Мәктәптәргә - бокс" проекты индерелә. 25 июндә - Бөтә донъя олимпия көнөндә Башҡортостан Хөкүмәте һәм Рәсәйҙең Бокс федерацияһы араһында республикабыҙҙа боксты үҫтереү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды, тип билдәләне спорт министры Руслан Хәбибов. Билдәләнеүенсә, Өфө, Күмертау, Октябрьский, Стәрлетамаҡ ҡалалары, Белорет һәм Стәрлетамаҡ райондары һынау режимында "Мәктәптәргә - бокс" программаһын ғәмәлгә ашыра башлай.

ИҪКӘРТЕҮ

# ӨФӨ УРАМДАРЫ ЯБЫЛА



**Быйыл баш ҡалала "Көньяҡ ҡапҡалар" территорияһын комплекслы төҙөүҙең инфраструктура проекты сиктәрендә эре объекттар төҙөлә һәм реконструкциялана башланы. Уларҙың береһе булып генерал Рыленко, Пугачев, Бородинская урамдары киҫелешендәге транспорт сиселешен төҙөү тора.**

Әммә төҙөүселәр был юл сиселешенең терәүҙәрен төҙөһөн өсөн Пугачев урамындағы 300 метрлыҡ араны - Пугачев урамынан Бородинская урамы сатынан алып Ҡариҙел йылғаһы аша Ташкисеүҙә һалынған күпер алдына тиклем - ябып торорға кәрәк ине. Әлеге ваҡытта бында оҙонлоғо 340 метр булған өҫтәмә участка төҙөлә. Бөгөнгә унда эштәр тамамланған, хеҙмәттәр юлды яҡтыртыу, светофорҙар ҡуйыу, юл ситтәрен эшләү менән мәшғүл, шулай уҡ юлдарға билдәләр һалына. Автомобилдәр яңы схема буйынса 9 августа йөрөй башланы ла инде.

Шул уҡ ваҡытта 9 августан 2023 йылдың 30 декабренә тиклем Армавир урамынан Пугачев урамына тиклем Зәйнәб Биишева урамы автомобилдәр өсөн ябыласаҡ, унан бары тик ошо урамда йәшәүселәр генә йөрөй аласаҡ. Генерал Рыленко һәм Пугачев урамы киҫелешендәге яңы яһалма ҡоролма алты һыҙатлы һәм ике кимәлле, 102,52 метр оҙонлоҡта буласаҡ. Автомобиль юлы 1,28 километр, төшөү урындары 2,6 километр тип планлаштырылған. Әммә юл сиселешенең үҙен төҙөй башлағанға тиклем бик күп коммуникацияларҙы үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Эштәр тулыһынса тамамланғас, ҡаланан сығыу сифатлыраҡ һәм хәрәкәт бөтөнләй икенсе төрлө буласаҡ.

Автомобилселәргә уңайһыҙлыҡтарҙы кәметеү өсөн Пугачев урамына параллель булған юл ике яҡлыға әйләндереләсәк, юл хеҙмәттәре унда юл билдәләрен алмаштырған да инде. Юл эштәрен башҡарғанда автотранспорт хәрәкәте ҡатмарлашыу ихтималлығын күҙ уңында тотоп, водителдәрҙең алдан уҡ альтернатив юлдарҙы ҡарап ҡуйыуы урынлы. Ҡалаға М5 трассаһы һәм Ырымбур тракты аша ла инергә мөмкин.

# ТАҒЫ АРТА



**Тажзәхмәт сире бер аҙ сигенеп, битлектәрҙән ҡотолоп, иркен итеп тын ала башлауыбыҙға күп ваҡыт та үтмәне, көҙөн был сирҙең ҡабат көсәйеү ихтималлығы тураһында иҫкәртеүҙәр көндән-көн йышая башланы.**

Республика менән идара итеү үҙәгендә үткән Хөкүмәт кәңәшмәһендә Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе Анна Казак уның сентябргә ҡарата арта барасағын белдерҙе. Был хәл-торошто тулы әҙерлек менән ҡаршылау өсөн әлегә ваҡыт барлығын, яңы тулҡынға тиклем вакцина алып һәм ревакцинация эшләтеп ҡуйырға кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды ул. Шул уҡ көндә "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында ла Анна Казак коронавирус инфекцияһы хәүефенең көҙгә ҡарай ОРВИ, киҙеүҙең артыуына бәйле тине. Бынан тыш, июнь-июлдә республикала элекке штамдарҙан айырмалы "Дельта" штамы менән сирләгән өсәр кеше асыҡланған. Был вирус алдағыларына ҡарағанда ауырыраҡ үтә, әммә вакцина алыусылар уны еңелерәк кисерә.

Башҡортостан Республикаһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәренән күренеүенсә лә тажзәхмәт менән сирләүселәр һаны яйлап арта бара. Мәҫәлән, 25 июлдән алып көндәлек күрһәткес күтәрелә. 29 июлдә 70 кеше хәүефле инфекция йоҡторһа, 30 июлдә был һан 75-кә етә, 31 июлдә иһә 81 була. 1 августа инде был һан 90-ға, 12-ндә - 166-ға етә.

Әле берниндәй ҙә сикләү саралары индерелмәһә лә, әгәр сир юғары тиҙлек менән таралһа, көҙгә табан улар ҡабат тергеҙелеп, тағы ла битлек режимына күсеү ихтималлығы бар.

✔ Кеше үҙенең егерме йылын бик матур йәшәп үткәрә. Шатлана, көлә, бер хәсрәте лә юҡ. Шунан ул өйләнә һәм ишәк ғүмеренә аяҡ баҫа. Тормоштоң бар ауырлығын үҙ елкәһендә йөкмәп бара. Шунан эт ғүмерен һүтә башлай.



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# АЛДАР БАТЫР РУХЫ...

## ырыуына ҡайтты





**Нуғай даруғаһы Бөрйән улысында бай феодал-тархан ғаиләһендә 1670 йылда тыуып үҫкән Алдар Иҫәкәев - тоҡомо менән тархандар затынан булған башҡорттоң аҫыл улы, тотош Башҡортостанға танылған тарихи шәхес, Петр I ҡаһарманы - Рәсәй Батыры, 1704 -1711 һәм 1735-1740 йылдарҙағы башҡорттарҙың милли азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе, Рәсәй батшалығының Ҡаҙағстандағы тәүге илсеһе, Ҡаҙағстанды тыныс юл менән Рәсәй составына ҡушыуҙа ҙур роль уйнаған дипломат, күп телдәр белгән тылмас-илсе, көрәш-алыштарҙа ал бирмәгән батыр, яуҙарҙа ҡурҡыу белмәҫ яугир, ғәскәрҙең күҙ төбәр баһадиры. Даны быуаттар ашаһында ла һүнмәҫ-һүрелмәҫ, исеме халҡы күңелендә мәңге ҡалыр башҡорт үҙенең тыуған яғына -Бөрйән районының Әтек ауылына һәйкәл булып ҡайтты, илгә рухи ҡалҡан, рухҡа ныҡлы таяу булып нығынды.**

Халҡыбыҙҙың милли геройы Алдар Иҫәкәев иҫтәлегенә стела асыу тантаһы мосолманса яңы йылдың 10-сы көнөндә - Ғәшүрәлә оло йыйын булып үтте Бөрйән ерендә. Бына моңло ла, һағышлы ла көй аҫтында Ирек Шәмиғолов "Алдар батыр" ҡиссаһынан өҙөк уҡый. Башҡорт халҡының рухи гимны "Урал" яңғырай. "Атайсал" ир-егеттәр ансамбле рухлы итеп "Алдар батыр" йырын башҡара. Оло ҡунаҡтарға ҡыҙҙар сигелгән таҫтамалдар бүләк итә. Эйе, ҡанлы, шанлы, данлы тарихыбыҙға ҡарата ихтирам, шәхестәребеҙ менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләй алырлыҡ көҙрәткә эйә булған шәхесебеҙгә стела асыу - бөгөнгө көндә, илһөйәрлек менән телһөйәрлек төшөнсәләре үтә лә кәрәк һәм ҡиммәт осорҙа, бик урынлы ваҡиға. Район хакимиәте башлығы Ғәзиз Миңлеәхмәт улы Манапов, ошо стеланы эшләтеү инициаторы Салауат Әмирхан улы Килдин, күренекле яҡташыбыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатовтар хәтерташ өҫтөндәге аҡ йәймәне аса. Ғәзиз Миңлеәхмәт улы телмәр тота:

- Бөгөн республика кимәлендә ҙур байрам - башҡорт халҡының легендар шәхесенә стела асыла. Ошо башланғысты күтәреп сыҡҡан ағайҙарға рәхмәт! Улар беҙгә был һорау менән мөрәжәғәт итте һәм яҡлау тапты. Бер төркөм апай-ағайҙар ошо хәтерташ, көмбәҙ өсөн аҡса сарыф итте. Алдар батыр, берҙән, Рәсәй ғәскәрҙәренең данын яҡлап, мәртәбәһен күтәреп, Аҙау походында күрһәткән ғәйрәтлеге, дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүҙәге баһаһыҙ эше менән илгә эскерһеҙ хеҙмәт итеү өлгөһө күрһәтеүсе. Икенсенән, ул - халыҡ улы, туған халҡы мәнфәғәтен ҡайғыртып йәшәүсе шәхес. Алдарҙың яҡты исеме - халҡы күңелендә...

- Бөгөн оло тарихи ваҡиғаның шаһиты булдыҡ: Алдар рухы тыуған яҡтарына ҡайтты, - тип дауам итте Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов: - Ҡана буйҙарында буй еткергән Алдар бөтә донъяға үҙен күрһәтә алған шәхес. Башҡорт дипломатияһын Кәрим Хәкимовтан баш ала тиһәләр ҙә, ул Алдар батырҙан башлана. Төрөк солтаны менән осрашыуы - үҙе бер тарих, Ҡаҙағстандың Рус дәүләтенә ҡушылыуында ла уның роле бар. Минең фекер - Алдар батырға заманса йыһазландырылған музей кәрәк. Бөрйән туризм йәһәтенән үҫешә. Әтекте лә туристар урап үтмәһен - район хакимиәтенә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына (Конгресс) ошоно күҙ уңында тотоу кәрәктер. Тағы: Бөрйән, Баймаҡ райондарында Алдар батыр призына милли көрәш буйынса ярыштар үткәрелеп, ул республика кимәленә сыҡһын. Алдар батыр исемен мәңгеләштереү маҡсатында тағы әҙәби әҫәрҙәр, фильм кәрәк. Беҙ бөгөн оло юлдың башында. Алдар батыр рухы беҙҙе берләштерһен, рухландырһын, дәртләндерһен...

Шулай итеп, күптән көтөлгән ваҡиға тормошҡа ашты, халыҡ танһыҡлаған һүҙ әйтелде. Ул һүҙҙе һәм ваҡиғаны билдәле тарихсы Салауат Хәмиҙуллин Алдар Иҫәкәевтың тормош юлы, батырлыҡ өлгөһө тураһындағы тарихи сығанаҡтар менән мисәтләп ҡуйһа, атаҡлы ҡурайсылар Роберт Юлдашев, Ринат Рамаҙанов һәм башҡалар сығышы шәхестең рухына мәҙхиә лә, рәхмәт тә, күтәрмәләү ҙә булып яңғыраны.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨНДӘГЕ ТӨШ...




**1-8 октябрҙә Өфөлә "Архитектура эҙҙәре - 2022" асыҡ архитектура фестивале үтәсәк. Уның темаһы Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Салауат" трагедияһы буйынса ҡуйылған "Өн аралаш ете төш" спектакле атамаһына бәйле. Һайлау турын үткән ҡатнашыусылар Башҡортостан урмансылары исемен йөрөткән Урман паркы территорияһында арт-объекттар ижад итәсәк. Уларҙы урынлаштырыу өсөн ете майҙансыҡ һайланған.**

Фестивалдә архитекторҙар, скульпторҙар, рәссамдар, дизайнерҙар, башҡа ижади ойошмалар вәкилдәре, архитектура факультеттары студенттары, ойошмалар һәм ябай граждандар ҡатнаша ала. Эштәрҙе конкурс комиссияһы һайлап ала. Ҡатнашыусыларға Өфө монар, төш, урман эйәләре һәм ҡала фантазияларын сағылдырыу тәҡдим ителә. Ойоштороусылар билдәләүенсә, Өфө йөҙө тиҙ үҙгәрә, яңы биналар һәм ҙур комплекстар үҫеп сыға, актив ял зоналары үҙгәреш кисерә. Шул уҡ ваҡытта, объектив һәм мәжбүри сәбәптәр арҡаһында, ҡаланың "йәшел билбауы" ҙур тиҙлек менән кәмей. Шуға ла йәшел киңлектәрҙе ылыҡтырырлыҡ итеп үҙгәртеү айырыуса мөһим.

Ҡала урманында ижадсылар, өндәге архитектуранан айырмалы рәүештә, миф донъяһына сумасаҡ. Сөнки урман һәр ваҡытта ла серле, урман эйәһе йәшәгән урын тип күҙаллана. Кеше иһә төрлө билдәләрҙе, тамғаларҙы үҙенсә аңлатып, киңлеккә яңы мифологик тарих өҫтәй. Ә төш - ул кеше психикаһының аңлатып булмаған сағылышы, серле һәм сикһеҙ фантазияға бай өлкә. Мостай Кәрим ижадында ла төш уңышлы файҙаланыла. 7 һаны иһә - мистик һан, шул уҡ ваҡытта баш ҡала райондары ла етәү һәм ҡатнашыусылар быны үҙҙәренсә асып бирә ала.

Конкурста ҡатнашырға теләүселәр ғаризаларын 12 августа тиклем archsledi@gmail.com адресы буйынса электрон почтаға положениела бирелгән форма буйынса ебәрә алды. Ғаризаға эскиз проекты рәүешендә конкурс эше беркетелеүе мотлаҡ ине. Проекттар электрон рәүештә, 100 см x 70 см форматта ҡабул ителде. Белешмәләр өсөн телефондар: +7 917 389-32-56 Аҙнабаева Ләйсән Ракит ҡыҙы, +7 927 323-91-24 Ғайсина Алия Хәйҙәр ҡыҙы.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮРМӘКСЕ АУЫНА...

## арыҫлан эләкмәҫ

Тыныс йәшәргә теләһәң, теленде тый, оҙаҡ йәшәргә теләһәң, ауыҙыңды тый.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һеҙҙең турала анекдоттар һөйләй башлайҙар икән, тимәк, ялға китергә ваҡыт еткән.

**(Бенджамин Дизраэли).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Аллаһы Тәғәлә кешене яралта һәм унан: "Һиңә күпме ғүмер бирергә?" - тип һорай.**

**- Барыһы ла һинең ихтыярыңда, Раббым, - тип яуаплай кеше.**

**- Ярай, улайһа, - ти Хоҙай Тәғәлә, - егерме йыл йәшәрһең...**

**- Ниңә улай аҙ ғүмер бирәһең, Раббым?- тип кеше илап ебәрә.**

**Шул саҡ улар эргәһенә ишәк килә. Хоҙай Тәғәлә уға ҡарап:**

**- Ә һиңә мин ҡырҡ йыл ғүмер бирәм. Егерме йыл эшлә һәм кешегә ярҙам ит, ә егерме йыл ял итерһең, - ти.**

**- Ул тиклем оҙаҡ йәшәү ауыр булыр, ғүмеремде ҡыҫҡарта бир, Хоҙай, - тип үтенә башлай ишәк.**

**- Ҡыҫҡартылған йылдарҙы минең ғүмеремә өҫтә... - ти кеше.**

**Шулай итеп, Хоҙай Тәғәлә ишәктең ҡыҫҡартылған ғүмер йылдарын кешенең ғүменә өҫтәй. Бына бер мәл улар эргәһенә эт килә.**

**- Ә һин ҡырҡ йыл йәшә, - ти уға Хоҙай Тәғәлә.- Егерме йылын кешегә хеҙмәт итерһең, егерме йылында ял итерһең.**

**- Юҡ, миңә ул тиклем ғүмер кәрәкмәй, ҡыҫҡарта күр уны, - тип үтенә башлай эт.**

**- Уныҡын да минең ғүмергә өҫтә, Раббым, - ти кеше. Хоҙай уның үтенесен үтәй. Бына улар эргәһенә маймыл килеп етә.**

**- Ҡырҡ йыл йәшә, - ти уға Хоҙай Тәғәлә. Маймыл да илап ебәрә:**

**- Ғүмеремде улай оҙон итмә, Раббым, ҡыҫҡарт, зинһар, - ти ул да. Хоҙай уның ғүмеренең дә яртыһын кешегә бирә.**

**Шулай итеп, кеше үҙенең егерме йылын бик матур йәшәп үткәрә. Шатлана, көлә, бер хәсрәте лә юҡ. Шунан ул өйләнә һәм ишәк ғүмеренә аяҡ баҫа. Тормоштоң бар ауырлығын үҙ елкәһендә йөкмәп бара. Шунан эт ғүмерен һүтә башлай. Кешенең балалары үҫеп етә, өйҙә булған бар әйберҙе ситкә ташый башлайҙар. Кеше ризаһыҙлыҡ белдерә, балалары менән туҡтауһыҙ бәхәсләшә, талаша. Бына маймыл ғүмере менән йәшәр мәл дә етә. Кеше ҡартая. Был ваҡытҡа инде уның йорто ла ауып төшөргә тора. Ул балаларынан балаларына ҡунаҡҡа йөрөй, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡараша, улар алдында төрлө сүрәткә инеп, маймылланырға ла тура килә уға.**

**Бына шулай үтә кешенең бар ғүмере..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22032

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
12 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 1007